ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

4-10 апрель (алағарай) 2015

№ 14 (640)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һөнәрселәр араһында...**

һөнәрсе эҙләнде



6

**Темәс ауылында...**

Вәлиди, Бабич эҙҙәре



7

**Кешеләр китап уҡыһа...**



тормоштағы хаталар ҙа әҙерәк булмаҫ инеме икән? 8-9

**Баш итенә саҡырышыу**



12

**ТВ-программа** 14

***Башҡорттар тос кәүҙәле һәм тарамыш, киң яурынлылар йыш осрай, улар иң ҙур ҡыйынлыҡтарҙы ла еңел үткәрергә һәләтле; араларында яман сирҙәр менән ауырыусылар һиҙелмәй; ҡалған ваҡ-төйәк ауырыуҙар ҙа, төбәктә йәшәгән башҡа халыҡтар менән сағыштырғанда, улар араһында әҙерәк... Был, моғайын, уларға ҡарата тәбиғәт стихияһы тәьҫирен йомшартыусы ҡатлам тормошо рәүеше менән бәйлелер.***
***В.М. Черемшанский.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Сирҙе иҫкәртеүе еңелерәк, тибеҙ ҙә ул, тик ниңә ошо ҡағиҙәне тотмайбыҙ?

***Афзал ҠАРАҒОЛОВ, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы:*** Байтаҡ йылдар Өфө ҡалаһы Киров районы буйынса Медицина-социаль экспертизаның офтальмология бюроһы эксперты булып эшләү дәүеремдә бик күп ауырыуҙар менән һөйләшергә, аралашырға тура килде. Сир һәр осраҡта ла күңелһеҙ, хәүефле хәл, ә бына күреү һәләтен юғалтыу бигерәк ҡурҡыныс. Пациенттарымдың бөтөнөһө лә тиерлек күҙҙәрҙе һаҡларға кәрәклеген бик һуңлап аңлауҙарын белдереп, үкенә ине. "Намыҫыңды йәштән һаҡла," тигән кеүек, күҙҙәрҙе лә йәштән һаҡлау кәрәк. Һуңғы бер нисә ун йыллыҡта күреү һәләте боҙолған кешеләр һаны күпкә артты. Ер йөҙөндә йәшәгән кешеләрҙең миллиардтан ашыуы күҙлек кейһә, үҫешкән илдәрҙә йәшәүсе һәр дүртенсе кеше күрәшлектән яфалана. Элек телевизорҙы әрләй инек, хәҙер компьютер бәләгә әйләнде: 2-3 йәшлек сабыйҙарҙың да ратҡан уйынсығы ул. Хәҙер балаларҙың бер-береһе менән аралашыу, китап уҡыу, саф һауала йөрөү, спорт менән шөғөлләнеү урынына "компик" менән дуҫлашып, көн-төн интернетта ултырыуы уларҙың күреү һәләтенә генә түгел, дөйөм сәләмәтлектәренә лә ҙур зыян килтерә. Бында күп нәмә ата-әсәнең талапсанлығынан тора: балаға компьютерҙа тейешле сәғәттәрҙә генә ултырырға рөхсәт итеп, уның көн режимын тейәл үтәүен контролдә тотоу кәрәк. Баланың һәр көндө иртәнге гимнастиканан башлауына өлгәшергә, ә бының өсөн уға шәхси өлгө булып торорға кәрәк. Күп нәмә шулай уҡ дөрөҫ туҡланыуға бәйле. Әгәр бала ошо йәшкә тейешле миҡдарҙа аҡһым, минераль матдәләр һәм витаминдар алып еткермәһә, күҙҙәр өсөн генә түгел, дөйөм организм өсөн хәүеф тыуа. Шуға күрә А, В2, С, Е, Д витаминдарына, кальций күп булған һөт, эремсек, ацидофилин, ҡатыҡ, сыр кеүек башҡа төр һөт аҙыҡтарына, майһыҙ ит, бауыр, балыҡ, йомортҡа, сәтләүектәр, кишер, алма, ҡабаҡ, шпинат, салат һәм башҡа аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк бирергә кәңәш итер инем. Белеүегеҙсә, күҙҙәр өсөн махсус күнегеүҙәр бик күп хәҙер. Үҙегеҙҙең участка күҙ врачы менән кәңәшләшеп, шуларҙың берәйһен һайлап шөғөлләнеү ҙә файҙа килтерер ине. Йәштән күнегелгән режим менән йәшәүҙең ыңғай һөҙөмтәләре өлкәнәйгән көндәрҙә бигерәк тә асыҡ күренә башлай, тик бындай бәхетлеләр һирәк арабыҙҙа, сөнки үҙ һаулығы өсөн ныҡышмалы көрәшергә күптәрҙең көсөнән килмәй. "Ауырыһаң ни - врачтар ни өсөн?" тип уйлап, бик ныҡ хаталана улар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИҒТИБАР!

## БАШҠОРТ ТЕЛЕН БЕЛӘҺЕҢМЕ?

"Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР законын тормошҡа ашырыу буйынса БР Хөкүмәте эргәһендәге комиссияның Терминология хеҙмәте менән Башҡорт дәүләт университеты 11 апрель "Башҡорт телендә һөйләшәм, башҡорт телендә яҙам" тигән девиз аҫтында башҡорт теленән диктант яҙыу ойоштора. Был акцияла һәр кеше ҡатнаша ала. Уны үткәреү принциптары рус теленән тоталь диктант яҙҙырыу тәртибе менән тап килә. Ойоштороусылар фекеренсә, был сара һәр кемгә үҙенең белем кимәлен тикшерергә ярҙам итеп кенә ҡалмаясаҡ, ә башҡорт теле мәсьәләләренә иғтибар йәлеп итәсәк, дәүләт телдәрендә дөрөҫ яҙыу проблемаларын йәмәғәтселек һәм киң мәғлүмәт саралары аша хәл итеү мөмкинлеге тыуасаҡ.

Барығыҙҙы ла 11 апрель сәғәт 10-да БДУ-ның төп корпусында (Өфө ҡалаһы, З. Вәлиди урамы, 32-се йорт, 02-се аудитория) һәм БДУ-ның Стәрлетамаҡ, Сибай, Бөрө, Нефтекама, Учалы филиалдарында көтөп ҡалабыҙ. Диктантты онлайн яҙырға була, бының өсөн БДУ-ның regdict.ru сайтында теркәлергә кәрәк. 2 апрелдән сайттың биттәрендә "Теркәлеү" ("Зарегистрироваться") тигән төймә буласаҡ. Диктантты БДУ-ға килеп яҙыусыларға алдан теркәлергә кәрәкмәй. Диктанттың һөҙөмтәләре regdict.ru сайтына ҡуйыласаҡ. Ҡатнашыусыларға үҙенең ысын исем-шәрифен яҙыу мотлаҡ түгел.

**ОЙОШТОРОУ КОМИТЕТЫ.**

ЯҢЫ РУБРИКА: "ПОЗИТИВ"

## НАСАРҒА СӘБӘП БУЛМАЙЫҠ!

**Илгиз ТЕЛӘҮБАЕВ, Белорет районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары:** Йыш ҡына беҙҙең милләттең эскелек һаҙлығына батыуы, етемдәр араһында беҙҙең балаларҙың күп булыуы тураһында һөйләйҙәр. Яңыраҡ райондың демографик хәле тураһында муниципаль район Советы президиумының киңәйтелгән ултырышында сығыш яһарға тура килде. Статистика бүлегенән алынған мәғлүмәттәр буйынса фекер йөрөткәндә, үрҙә һөйләнгән хәбәрҙең бөтөнләй дөрөҫлөккә тап килмәүе асыҡланды. Сағыштырып ҡарағанда, киреһенсә, районыбыҙҙа нәҡ башҡорт йәштәренең күберәк юғары белем алыуын, артабан үҫергә ынтылыуын күрергә була. Райондар буйлап йөрөгәндә лә башҡорт ауылдары матурлығы, төҙөклөгө менән айырылып тора. Милләттәштәребеҙҙең береһенән-береһе уҙҙырып йорт төҙөүе, ергә йәбешеп ятыуы, мал тотоуы, баҡса үҫтереүе, затлы машиналарҙа йөрөүе лә һоҡланыу уята. Башҡорттар күберәк үлә, тип әйтеүҙәре менән дә килешеп булмай. Әгәр был ысынлап та шулай булһа, районыбыҙҙың Сермән ауылы янында яңы Иҙел ауылы ла барлыҡҡа килмәҫ ине. Ә инде, башҡорт ғәмһеҙ, тигән һүҙҙәрҙе башлыса бөгөнгө тормошҡа яраҡлаша белмәгән, уңышһыҙлыҡтарын башҡаларға япһарырға тырышҡан кешеләр тарата. Шуның өсөн, ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, үҙебеҙҙең ниндәй милләт улы йә ҡыҙы икәнде иҫтә тоторға, халҡыбыҙ тураһында теләһә ниндәй һүҙҙәр таралыуына сәбәп булмаҫҡа тейешбеҙ.

ТУҠТА, МӘЛ!



Ҡарҙар ирей, һыу таша...

12+

***✓ Көнделеңдә, ғаиләңдә тыныслыҡ, тәртип булһа, йорт алды баҡсаңда емертеп йәшелсә-емеш үҫтерһәң, араҡы-тәмәкене онотһаң, күберәк хәрәкәт итеп, йәйәү йөрөргә тырышһаң, шул үҙе инде сәләмәтлек.***



*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**1 апрелдән Башҡортостандың бөтә почта бүлексәләрендә 2015 йылдың икенсе ярты йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө"гә яҙылыу 539 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 569 һум 76 тин тәшкил итәсәк.**

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 252 һум.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 252 һум.

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә **он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу" һылтанмаһы аша vipishi.ru сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Мартта гәзитебеҙҙе яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер Рәшит Назаровтың **"Ер һәм йыһан йыры"** йыйынтығын, Шәүрә Шәкүрованың **"Өфө вокзалы"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, **"Антология поэзии Башкортостана"**, Ә. Әсфәндийәровтың **"История сел и деревень Башкортостана"**, башҡортса **"Дини календарь"**, Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*



## Сирҙе иҫкәртеүе еңелерәк, тибеҙ ҙә ул, тик ниңә ошо ҡағиҙәне тотмайбыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Зөһрә БАТЫРШИНА, һаулыҡ һаҡлау хеҙмәте ветераны, Баймаҡ районы:*** Беҙҙең Иҫке Сибайҙа ла, оптималләштереү менән бәйле, участка больницаһын ябып ҡуйҙылар, уның ҡарауы, 10 койка-кеше урынлыҡ көндөҙгө стационар эшләй. Медик ҡыҙҙарыбыҙ уңғандар, йүгереп йөрөп эшләйҙәр, уларға һүҙ әйтерлек түгел: урындағы халыҡҡа, ҡарты-йәшенә ҡарамайынса, дөйөм диспансерлаштырыу үткәрәләр, прививка мәлдәрен дә ваҡытында башҡаралар. Сибайҙың яҡын булыуы ла уңайлы: кеше район поликлиникаһына сиратҡа яҙылып, көтөп торорға теләмәһә, ҡалаға бара ла күренә. Унда врачтар ҙа күп һәм тәжрибәлерәк, заманса медицина ҡоралдары ла бар.

Тик бына кеше сәләмәтлеге, үкенескә күрә, медицина хеҙмәте сифатына ғына бәйле түгел шул, ә күп йәһәттән һәр кемдең үҙенән - йәшәү рәүеше, холоҡ-ғәҙәте, белем-тәрбиә кимәленән дә тора. Халыҡта "Сирен йәшергән - үлгән" тигән тапҡыр бер һүҙ бар. Шуның кеүек, сирләһә лә, "Бөтөр әле, үтер әле", тип йөрөгәндәр ҙә осрап тора тормошта. Үкенескә, ундай осраҡтарҙа йыш ҡына сир бер ҡайҙа ла "үтеп" китмәй, эш үтеп китә. Күберәк ваҡыт үткән һайын, ауырыуҙың киҫкенләшә генә барыуы ихтимал. Ир-егет, ғәҙәттә, больница юлын тапарға яратмай, шулай ҙа йылына бер барып тикшерелеп тороу уларҙың береһенә лә зыян итмәйәсәк. Ҡатын-ҡыҙҙың инде аңлашыла: донъям, һыйырым, тип ҡырталаша. Уларға ла аңлау кәрәк: сирле кешегә донъя ҡайғыһы китә, иң тәүҙә һаулыҡ кәрәклеген аҙаҡ ҡына төшөнә ундайҙар. Ә бит төптән уйлап ҡарағанда, һәр кемдең сәләмәтлеге - үҙ ҡулында. Был һәр кемдең тормош рәүешенә туранан-тура бәйле. Көнделеңдә, ғаиләңдә тыныслыҡ, тәртип булһа, йорт алды баҡсаңда емертеп йәшелсә-емеш үҫтерһәң, араҡы-тәмәкене онотһаң, күберәк хәрәкәт итеп, йәйәү йөрөргә тырышһаң, шул үҙе инде сәләмәтлек. Мин бында яңы бер нәмә лә әйтә алмайым, онотола барған билдәле ябай ғына нәмәләрҙе яңыртып, көн дә шул ябай ғына тойолған ҡағиҙәгә эйәреп, үҙеңде шуға буйһондороп йәшәй алыу - үҙе ҙур хеҙмәт ул.

***Рәмилә ИҪӘНБАЕВА, йорт хужабикәһе:*** Минең уйымса, сирҙе иҫкәртеү өсөн уның иң тәүге билдәләрен көнәлгәре асыҡлау фарыз. Ә был бик һирәк осраҡта һәм ентекле анализдар тапшырғандан һуң ғына мөмкин. Тик бына табиптарҙың күпселеге анализдағы ҡайһы бер күрһәткестәрҙең тайпылышына иҫе китеп бармай. Тап шул арҡала сиргә юлыҡты ла инде бер танышым. Өфөгә барғас, ваҡытында мөрәжәғәт итмәүҙә урындағы врачтарҙы түгел, ә уның үҙен ғәйепләнеләр. Районымды күрһәтеп яҙмағыҙ инде, зинһар, юғиһә, көнөң төшөп, әллә ниҙә бер барырға тура килһә, табиптар үпкәләр. Дөрөҫөн генә әйткәндә, район дауаханаһында эшләүсе врачтарға минең әллә ни ышанысым да юҡ: тәжрибәле, төплө белгестәр һирәк хәҙер урындарҙа. Әллә белемдәрен камиллаштырыу буйынса эшләмәйҙәр, әллә көн үтһен тип кенә ултыралар. Ә инде Өфөгә барып күренәйем, тиһәң, йүнәлтмә бирмәйенсә йонсоталар. Ә сир көтөп тормай, бер-ике көн эсендә лә хатта аҙып китеүе бик ихтимал.

Баш ҡала белгестәренә лә хәҙер үҙең теләгән ваҡытта барып әләгермен, тимә - алдан яҙылыу буйынса ғына мөмкин. Ә бит сирләп китеренде ике-өс аҙна алдан планлаштырып булмай ҙа баһа! Алдан яҙылыу системаһы, бер яҡтан, һәйбәт, тик ул күберәк хроник сирлеләр өсөн ҡулай. Ә бөгөн-иртәгә ауырып киттең икән - үҙеңде әлеге район врачы ҡулына тапшырырға тура килә инде. Ярай ҙа йүнлеһе тап булһа. Минең бер туғанымды "ревматизмдан" дауалай торғас, хәле хөртәйеп, санавиация менән Өфөгә ебәреүҙәре иҫемә төшһә, ревматизм билдәләрен лейкоздан айыра белмәгән наҙан табиптарҙан уттан ҡурҡҡандай ҡурҡам. Элегерәк булды был, ләкин беҙҙең районда хәл шунан бирле әллә ни үҙгәрмәне лә, буғай. Элек, исмаһам, ауырыуҙар ҙа, һауҙар ҙа ихтирам итеп, исемен теҙән төшөрмәгән абруйлы, төплө табиптар була торғайны. Халыҡ уларға йөрөй ине. Хәҙер кемгә барып кәңәшләшергә белеп булмай. Уролог, проктолог, эндокринолог, гастроэнтеролог һ.б. шуның кеүек белгестәр бөтөнләй юҡ, уларҙың бөтәһе өсөн дә хирургҡа ебәрәләр, был бит дөрөҫ түгел! Өфөләге Республика клиникаһында ла хатта бер бөртөк кенә проктолог эшләй, уға кәмендә бер ай алдан яҙылып, көтөргә кәрәк. Ә сирлегә кисектергеһеҙ ярҙам кәрәк булһа? Был табипҡа, ғәҙәттә, тап шундайҙар мөрәжәғәт итә лә...

Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге сәйәсәттең ҡайҙа барыуы күптән билдәле инде: шулай әкренләп түләүлегә күсеүҙәр уйҙары. Шуға күрә, кеҫәһе йоҡа булғандарға һис тә ауырырға ярамай. Һәр төрлө һауыҡтырыу сараларын үҙләштереп (дөрөҫ туҡланыу, араҡы-һыра-тәмәкене ташлау, күберәк хәрәкәт, дарыу үләндәре, һөлөк һалдырыу һ.б.), үҙеңә үҙең табип булып йәшәргә кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ҡытай Халыҡ Республикаһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Ли Хуэй менән осрашты. Яҡтар сәнәғәт, сауҙа-иҡтисади, инвестиция һәм ғилми хеҙмәттәшлек йүнәлештәрен, шулай уҡ Рәсәй менән Ҡытай төбәктәренең үҙ-ара килешеп эш итеүен нығытыу мәсьәләләрен тикшерҙе. Билдәләнеүенсә, 2014 йылда Ҡытай Башҡортостандың тышҡы сауҙа партнерҙары араһында бишенсе урынды биләне. Уның тышҡы сауҙа әйләнешендәге өлөшө 4,8 процент тәшкил итте.

✓ Башҡортостанда йылына 300 мең тонна металл етештереү ҡеүәтенә эйә булған ҡорос прокаты заводын төҙөү планлаштырыла. Был хаҡта Ҡытай Халыҡ Республикаһының Рәсәйҙәге илсеһе Ли Хуэй менән осрашыуҙа Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов белдерҙе. Билдәләнеүенсә, әлеге ваҡытта предприятиены проектлау бара, ә төҙөлөштөң 2015 йылдың аҙағында - 2016 йылдың баштарында башланыуы ихтимал.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Пензала Рәсәй Федерацияһы Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле ҡарамағындағы Совет ултырышында сығыш яһаны. Уның барышында торлаҡ төҙөлөшө өлкәһендәге хәлгә, ипотека кредитлауы үҫешенә, эконом класлы йорттар төҙөүҙе арттырыу буйынса сараларға бәйле мәсьәләләр тикшерелде. Рөстәм Хәмитов үҙ сығышында Башҡортостандың торлаҡ төҙөлөшө күләме буйынса Волга буйы федераль округында беренсе урын биләүе хаҡында хәбәр итте.

✓ Өфөлә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай майҙансығында Башҡортостандың коммерцияға ҡарамаған ойошмаларының II Граждандар форумы булып үтте. Ул республикала граждандлыҡ йәмғиәте үҫеше проблемалары һәм коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙың муниципаль берәмектәрҙең социаль-иҡтисади үҫешендә ҡатнашыуы мәсьәләләре буйынса фекерҙәр туплау өсөн аралашыу майҙансығына әүерелде. Форум эшендә Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡатнашты.

✓ Иглин районы Советы Ғафуан Шәйхетдиновты контракт буйынса район хакимиәте башлығы вазифаһына тәғәйенләне. Ғафуан Шәйхетдинов 2010 йылдың октябренән хәҙерге көнгә тиклем Йәрмәкәй районы хакимиәте башлығы вазифаһын биләгән.

*✓ XX быуат ахыры тыуған балалар кумирына әүерелгән Гарри Поттерға тиң башҡа герой тыуҙыра алмай нишләптер ҡәләм оҫталары. Был тормошта балаларыбыҙ Поттерҙағы кеүек "тылсымлы таяҡҡа" ғына ышанып үҫмәһен ине.*



*БЫЛ АЙҘА...*



# АПРЕЛЬ КӨЛКӨНӘН БАШЛАНДЫ

**Апрель, тигәндә, "ҡарҙар ирей, һыу таша, талдар бөрөһөн аса" тигән күңелле йыр һүҙҙәре яңғырап киткәндәй ҡолаҡта. Хәйер, апрелдең көләс, ҡояшлы, күңелле ай булыуын уның тәүге көнө үк һөйләп тора: көлкө һәм юмор көнө. Бөтөн донъя халыҡтары мәрәкә, шаян ҡылыҡтар һәм әләкләшеү, зыянһыҙ алдашыуҙар менән бер күңел асып ала.**



Март ахыры төнгө һәм иртәнге сатлама һалҡындары менән нисек кенә тартҡылашмаһын, апрель дилбегәне үҙ ҡулына алды: һиҙҙермәҫтән генә ҡар ҙа иреп бөтөп бара, хатта йылы яҡтан ашығып, тәүге сыйырсыҡтар ҙа ҡайтып еткән, тиҙәр. Күрәһең, улар ҙа үҙ байрамдарын тыуған яҡтарында үткәреүҙе хуп күрә. Ниндәй байрам ул тағы, тиһегеҙме? Һуң әлеге 1 апрель инде! Халыҡ-ара ҡоштар көнө лә бит ул. Өфөлә сыйырсыҡ ояларын да күргән юҡ, һайрағандары ла бик ишетелмәй, сөнки был ҡоштар аулаҡ һәм йәмле ауыл ерҙәрен үҙ итеүсән, күрәһең. Ә унда инде йорт һайын тиерлек ҡупшы сыйырсыҡ оялары эшләп ҡуйыла. Уның ҡарауы, ҡышҡы-яҙғы көндәрҙә ҡала парктарында, мәктәп биналары тирәләй үҫкән ағастарҙа тағараҡтар элеп, ем һибеп ҡуя хәстәрле ҡулдар - ҡоштар дуҫтары. Был эшкә айырыуса балаларҙың йәлеп ителеүе мөһим. Йәш быуынды изгелек, илһөйәрлек рухында тәрбиәләү ата-әсә һәм мәктәптән тыш, хөрмәтле яҙыусыларыбыҙ бурысы ла икәнен онотоп ебәрмәйек, тип аңғартҡандай беҙгә 2 апрель - Халыҡ-ара балалар китабы көнө. Яҡшымы-насармы, әммә XX быуат ахыры тыуған балалар кумирына әүерелгән Гарри Поттерға тиң башҡа герой тыуҙыра алмай нишләптер ҡәләм оҫталары. Был тормошта балаларыбыҙ Поттерҙағы кеүек "тылсымлы таяҡҡа" ғына ышанып үҫмәһен ине берүк... Йәш быуын вәкилдәре ысынбарлыҡҡа виртуаль "селтәр" аша күҙәтеп түгел, ә төплө белем алып, үҙҙәре теләгән һөнәргә эйә булып, ысын гражданлыҡ позицияһынан баҡһын, тиһәк, уларға тормоштарында маҡсат һәм өлгө булырҙай миҫалдар, фиҙаҡәр һөнәр эйәләре хаҡында күберәк һөйләйек. Ҡыҙыҡ, бөгөнгө балалар, үҫкәс, кем булырға хыяллана икән? Бер таныш уҡытыусы әйтмешләй, уларҙың күпселеге хәҙер банкир, эшҡыуар, директор кеүегерәк аҡсалы кәсепте хуп күрә, ә геолог булып, тау-таш аҡтарып, ил өсөн файҙалы ҡаҙылманы кем эҙләр? Йыһан, күк киңлектәрен кем айҡар? Ошо ҡаһарман һөнәр эйәләре хаҡында һөйләргә форсат тыуа апрелдә балаларға: 5 апрелдә Бөтөн донъя геологтар көнө билдәләнһә, Һыу аҫты кәмәһендә һәләк булғандарҙы иҫкә алыу (7), Бөтөн донъя авиация һәм космонавтика, шулай уҡ Һауа һөжүменә ҡаршы оборона ғәскәрҙәре көндәре (12), Бөтөн донъя сәләмәтлек (7), Халыҡ-ара һәйкәлдәр һәм тарихи урындар (18), Халыҡ-ара бейеү (29) көндәре киң билдәләнәсәк был айҙа. Бер ыңғайҙа мосолман ҡәрҙәштәр ҡолағына ла төшөрөп ҡуяйыҡ: 23 апрель - Рәжәб айының тәүге йомаһына ҡаршы төн Рәғәиб кисе билдәләнәсәк. Был кистә Аллаһтың бәндәләргә мәрхәмәте тағы ла көсәйә: доғалар ҡабул булыр, намаҙҙарҙың, уразаларҙың, бирелгән саҙаҡаларҙың әжер-сауаптары күп тапҡырға арттырылыр, тиелә.

Был айҙағы тағы бер мөһим иҫтәлекле дата - 30 апрель - 70 йыл элек совет яугирҙарының Берлинда рейхстаг өҫтөнә Еңеү байрағын ҡаҙаған көндө нисек онотаһың! Әйткәндәй, шул да булһын мәғлүм: хәҙерге календарҙарҙа, нишләптер, 22 апрель фәҡәт Ер көнө булараҡ ҡына билдәләп кителә, ә ваҡытында планетала тәү тапҡыр революция яһап, халыҡ ҡулына ерҙе тартып алып биреүсе В. И. Лениндың исеме - ләммим... Тарихҡа еңел ҡарамайыҡ: күпме юғалтыуҙар аша яуланған Еңеүебеҙҙе лә әлегеләй онота күрмәйек, йөрәгебеҙҙән сығарып ырғытмайыҡ, йәмәғәт, ҡорбандар рухы кисерә алмаҫ быны...

**Әйткәндәй, апрелдә шундай юбилейҙар билдәләнә:**

4 - Башҡортостандың халыҡ артисы Тәнзилә Хисамоваға - 70 йәш

19 - БАССР һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты режиссер Лек Вәлиевтың тыуыуына - 80 йыл

20 - шағир Батыр Вәлидтең тыуыуына - 110 йыл

- яҙыусы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Талха Ғиниәтуллинға (Анатолий Генатулин) - 90 йәш

29 - РФ һәм БР-ҙың атҡаҙанған артисы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы Йәмил Әбделмәновҡа - 50 йәш.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# УҠЫЙБЫҘ, БАҺАЛАЙБЫҘ, ЫШАНАБЫҘ!

**Кеше ни өсөн гәзит-журналдар уҡый? Берәүҙәр уларҙы тынғыһыҙ эш көнө аҙнаһынан һуң ял итеү, донъя, ил, республика, район хәлдәрен белеү өсөн ҡулына ала. Икенселәр буяу еҫе аңҡып торған баҫма биттәренән тыныслыҡ, өмөт бүләк итеүсе һүҙ эҙләй. Ә "Киске Өфө"нө уҡыусылар быларҙың барыһына ла тулы кимәлдә өлгәшә, сөнки уның биттәрендә баҫылған һәр мәҡәлә файҙалы мәғлүмәт бирә, күңелгә ятышлы фекер еткерә, барыһының да яҡшы булырына ышаныс уята.**

"Киске Өфө" һәр саҡ үҙенең уҡыусылары менән тере әңгәмә алып барыу оҫталығына эйә булыуы менән айырылып тора. Гәзиттә баҫылған мәҡәләләрҙе уҡығанда үҙеңде шул ваҡиғаларҙың ҡатнашыусыһы итеп тояһың. Шулай уҡ гәзит биттәрендә тәрән йөкмәткеле, төрлө өлкәгә ҡағылышлы, кисекмәҫтән хәл итәһе мәсьәләләрҙе күтәргән материалдар күп булыуы ла уны гәзит уҡыусы тарафынан баһалы итә. Донъяуи ысынбарлыҡтың кире тойғолар ҡалдырыусы, негатив хәл-ваҡиғаларҙан ғына тормауын, ә тормошта матурлыҡҡа ла, батырлыҡҡа ла, изгелеккә лә урын барлығын асыҡ күрһәтә белеүе яратҡан баҫмабыҙҙың тағы ла бер ыңғай яғы. Дәрәжәле, тәжрибәле, оло ихтирамға лайыҡ шәхестәребеҙ менән бер рәттән, йәш үлән һымаҡ яңы баш ҡалҡытып килгән, ҡояш аҫтында үҙ урынын табыу өсөн ал-ял белмәй эшләгән уңышлы йәштәребеҙ хаҡында ла мәҡәләләр артабан да күп булыр, тип ышанам. Нәҡ ошондай йәштәребеҙгә ҡарап йәштәштәре генә түгел, хатта донъя ауырлығынан һынырға еткән ололар ҙа яңынан йәшәү йәме табырға үҙендә көс таба икәнлегенә үҙемдең миҫалдан сығып әйтә алам. Шулай уҡ сәсәндәр әйтешен дә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп барам һәм көтөп алам. Гәзиттең һәр һанында баҫылып килгән халҡыбыҙҙың матур йолалары тураһында бәйән ителгән рубриканан үҙем өсөн бик күп мәғлүмәт алыуым менән бер рәттән, балаларыма ла уҡыйым. Кроссвордтарҙы ла билдәләп үткем килә - ундағы һорауҙарға яуап эҙләй-эҙләй хәлдән тайғас, төрлө һүҙлектәр һатып алдым хатта - өй китапханабыҙ тулыланып ҡалды. Һуңғы ваҡытта баҡсаға бәйле мәғлүмәтте күбәйткәнегеҙ өсөн ҡатынымдан айырым рәхмәт - баҡсасы өсөн бик тә ҡулай булды.

Ташҡа баҫылған һүҙ ҙур көскә эйә, шуға ла гәзитте алдырыусы һәр кеше уның биттәрендә профессионаллек, дөрөҫлөк һәм намыҫлылыҡ күрергә теләй. "Киске Өфө" уҡыусылары был йәһәттән бәхетле, сөнки быларҙың барыһы ла яратҡан баҫмабыҙға хас сифаттар.

**Йәмил ШӘРИПОВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Стәрлетамаҡ район Советы ҡарары менән Рөстәм Баһауетдинов контракт буйынса Стәрлетамаҡ районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде.

✓Республика Хөкүмәтенең ҡарарына ярашлы, 15 апрелдән "Башавтотранс" предприятиеһы автобустарында юл йөрөү хаҡы республика буйынса бер төрлө буласаҡ. Предприятие автобустарында ҡулаҡса менән хисаплашҡанда билет хаҡы - 18, пластик карта менән түләгәндә 15 һум тәшкил итәсәк. Шуға ҡарамаҫтан, шәхси автобустарҙа юл йөрөү хаҡы дәүләт транспортына ҡарағанда юғарыраҡ һәм 20-35 һумға тиклем тирбәлә.

✓Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәте коллегияһы ултырышында Рәсәй Президенты быйыл илдә үтәсәк халыҡ-ара сараларҙың хәүефһеҙлек кимәлен юғары кимәлдә тәьмин итергә ҡушты. Дәүләт башлығы 2015 йылға өҫтөнлөклө бурыстарҙы билдәләне. "Тәү сиратта мин Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын байрам итеүҙе һәм Өфөлә үтәсәк БРИКС һәм ШОС саммиттарын күҙ уңында тотам", - тип билдәләне Владимир Путин.

✓Рәсәй Президенты менән "тура бәйләнеш" 16 апрелдә була. Владимир Путинға һорауҙарҙы 9 апрелдән бирә башларға мөмкин. Тапшырыуға бер аҙна ҡалғас, махсус үҙәктәр һәм сайт асыла, тип хәбәр итә ТАСС мәғлүмәт агентлығы "Известия" гәзитенә һылтанып. "Тура бәйләнеш" алдынан мутлашыусылар ҙа табылған: улар телетапшырыуҙың ялған сайтын булдырып, бер һорау өсөн граждандарҙан 50 һум талап иткән. Был юлы ла мутлашыусыларҙың әүҙемләшеүе көтөлә.

✓Республиканың ундан ашыу медицина учреждениеһы июль айында Өфөлә үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттарын медик-санитар яҡтан тәьмин итәсәк. Улар араһында Ғ.Ғ. Ҡыуатов исемендәге республика клиник дауаханаһы, 2-се республика клиник дауаханаһы, Кардиология үҙәге, 4-се йоғошло ауырыуҙар дауаханаһы, Ашығыс медицина ярҙамы дауаханаһы, 21-се, 13-сө һәм 18-се ҡала клиник дауаханалары, ашығыс медицина ярҙамы станцияһы, Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты бар.

✓"Туризм. Спорт. Ял. Шифаханалар" күргәҙмәһендә "Шихандар" туристик-тергеҙеү паркы проектының презентацияһы булды. Уны Ишембай районында булдырырға ниәтләйҙәр. "Шихандар" проекты Ҡуштау тауы һәм Шәкетау карьеры биләмәһен үҙ эсенә ала. Яҡын киләсәктә карьерҙы тергеҙеп, уның урынында асыҡ һауалағы боронғо хайуандар музейы булдырыу планлаштырыла.

МИҘГЕЛ МӘШӘҠӘТЕ



# ЕР ҺЫУҒА ТУЙЫНМАҒАН ӘЛЕ...

**Күҙ көнө һәм ҡышын алып барылған күҙәтеүҙәргә ярашлы, быйыл ҙур ташҡындар ҡурҡынысы күҙалланмай. Башгидромет мәғлүмәттәренә ҡарағанда, көҙөн ер нормаға ярашлы дым алды. Йылғаларҙың ҡышҡы боҙ ҡатламы ла йыллыҡ норманан артманы. Боҙҙарҙың ҡалынлығы 35-50 сантиметр тәшкил итеп, уртаса күрһәткестән 15-20 сантиметрға әҙерәк булды. Был яҡшы күренеш, сөнки боҙ киткәндә һыу тығындары аҙыраҡ буласаҡ.**

Ҡар запасы республикала нормаға ҡарата 65-80 процент тәшкил итә. Был күрһәткес районда ҙа бер үк түгел. Шулай уҡ һыу запасы буйынса күрһәткестәр ҙә төрлө. Үрге Йәркәй, Баҡалы, Туймазы, Учалы, Хәйбуллала ул уртаса 45-95 мм тәшкил итһә, Йылайырҙа, Павловкала, Оло Таләктә күрһәткес 135-220 мм-ға тиң булды.

Телгә алынған факттарҙан сығып, һыу кимәленең артыҡ күтәрелмәйәсәген фаразлайбыҙ. Былтыр Ағиҙел йылғаһы Өфө тапҡырында 663 сантиметрға күтәрелде, йәғни 130 йыл дауамында күҙәтелгән осорҙоң күп йыллыҡ уртаса кимәленән (730 сантиметр тәшкил итә) 67 сантиметрға түбәнерәк булды. Шаҡша бисҭәһе янында Ҡариҙел йылғаһы ла күп йыллыҡ нормаһынан 5 сантиметрға әҙерәк булды - 765 сантиметрға күтәрелде. Ә Дим йылғаһы Бочкарево тапҡырында 281 сантиметр ғына булған, әйтергә кәрәк, уның уртаса кимәле 628 сантиметр тәшкил итә. Быйыл да йылғаларҙың ошо кимәлдән юғары күтәрелмәйәсәген, бәлки, тағы ла әҙерәк буласағын күҙаллайбыҙ. Йылғаларҙың боҙҙан әрселеүе йылдағанан 2-3 көнгә алдан башланасаҡ.

Һыуһаҡлағыстарҙа яҙға табан уларҙы һыу запасынан бушатыу бара. 18 мартҡа Павловка һыуһаҡлағысы - 72, Нөгөш - 84, Йомағужа 83 процентҡа бушатылды. Әйтергә кәрәк, телгә алынған һыуһаҡлағыстар ташҡынды тотҡарлап тороусы факторҙар булып тора. Йомағужа Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат ҡалаларында Ағиҙелдең ташыу кимәлен 50-70 сантиметрға кәметә, Павловка Өфө янында йылғаның ташыу кимәле 1 метрға кәмерәк булыуын тәьмин итә, Затонды, Нижегородканы һыу баҫыуҙан тотҡарлап тора. Шулай ҙа телгә алынған микрорайондар, йылдағыса, һыу баҫыу ҡурҡынысы сигендә буласаҡ.

Ә ерҙәге һыу кимәленә килгәндә, бер аҙ проблемалар бар. Былтыр яуым-төшөм етерлек булһа ла, ер 2012, бигерәк тә 2010 йылдарҙа юғалтҡан һыу запастарын һаман ҡайтармаған әле. 2010 йылда ер аҫты һыуҙары 2-4 метрға тиклем төшкән, ҡабаттан тулыланыу өсөн күп кенә ваҡыт кәрәк буласаҡ. Йәғни, ер әлегә һыу менән тулы кимәлдә туйынмаған.

**Әхтәм ҒӘББӘСОВ,**
**РФ Тәбиғәт ресурстары министрлығының Ағиҙел һәм Урал йылғалары һыу объекттары мониторингы буйынса федераль дәүләт бюджет учреждениеһының бүлек мөдире.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТҮЛӘҮЛЕГӘ ӘЙЛӘНМӘҺЕН!



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы коллегияһында сығыш яһаны. Ултырыш барышында министрлыҡтың 2014 йылдағы эшенә йомғаҡ яһалды һәм яҡын киләсәккә өҫтөнлөклө бурыстар билдәләнде.**

Республика Башлығы билдәләүенсә, дәүләт тармаҡты үҫтереүгә етди иғтибар бирә, ҙур күләмдә аҡса йүнәлтә һәм мөһим күрһәткестәрҙең яҡшырыуын көтөргә хоҡуҡлы, әммә һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге хәл яҡшы яҡҡа үҙгәрмәй. Ғүмер оҙайлығы буйынса Башҡортостан уртаса Рәсәй күрһәткестәренән ҡалыша. Төбәк ошо күрһәткес буйынса Волга буйы федераль округында туғыҙынсы урынды биләй.

Башҡортостан Башлығы үҙ сығышында медицина хеҙмәте күрһәтеүҙең түбән сифаты, белгестәрҙең етешмәүе, бигерәк тә ауыл ерҙәрендә, тармаҡта системалы кадрҙар сәйәсәтенең юҡлығы, шифахана-курорт хеҙмәтләндереүе һәм реабилитация етешһеҙлектәре, шулай уҡ тармаҡтың түләүле булыуы тураһында һөйләне.

- Дөйөм алғанда, бөтә ерҙә лә тармаҡты түләүлегә әйләндереүгә юл ҡуйырға ярамай. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, поликлиникаларҙа, дауаханаларҙа пациенттарҙы бушлай күрһәтелергә тейешле хеҙмәттәр өсөн түләтергә мәжбүр итеүҙәре хаҡында йыш һөйләйҙәр, - тине төбәк етәксеһе. - Мин был осраҡта шундай эштәр башҡарған кешеләрҙе эштән бушатыуҙы талап итәм.

Рөстәм Хәмитов министрлыҡтың эшмәкәрлегенә лә ҡайһы бер тәнҡит һүҙҙәре еткерҙе. Атап әйткәндә, әлеге тиклем ведомство ҡарамағындағы учреждениеларҙың эшмәкәрлеген анализлау буйынса системалы эш ойошторолмаған, ентекле статистик материалдар юҡ, етәксе вазифаларға лайыҡлыҙ кандидатуралар тәҡдим ителә.

Республика Башлығы шулай уҡ дауалау учреждениеларына дарыуҙар һатып алыуҙы үҙаҡлаштереүҙе тәьмин итергә ҡушты.

- Беҙ әлегә ҡыҫҡаса анализ яһаныҡ. Ҡайһы бер препараттарҙың хаҡтары ике-өс кенә түгел, ә ун тапҡырға айырыла. Дауаханаларға ҡиммәтле препараттар алыу менән шөғөлләнеүселәр, һеҙҙең намыҫығыҙ бармы? Һеҙ нимә эшләйһегеҙ? Һуң булмаҫ элек туҡтағыҙ. Хеҙмәткәрҙәрегеҙгә лә дарыуҙарҙан килем алыу иң ауыр енәйәт икәнлеген аңлатығыҙ, быға бер ниндәй ҙә аҡлау юҡ, - тине Рөстәм Хәмитов.

Республика етәксеһе алдағы осорҙа ҡуйылған бурыстарҙы хәл итеү өсөн медицина берләшмәләрен илебеҙҙең һәм сит илдәрҙең ыңғай тәжрибәһен иғтибар менән өйрәнергә саҡырҙы.

# КҮПТӘН КӨТӨЛГӘН МАРШРУТ




**"Ирәмәл" тәбиғәт паркында башҡорт халыҡ эпосы "Урал батыр" буйынса экологик-мәҙәни маршрут булдырыла. Был хаҡта Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы хәбәр итә. Проект Рус география йәмғиәте ойошторған конкурс йомғаҡтары буйынса 650 мең һум күләмендәге грант аҡсаһына тормошҡа ашырыла.**

Тәбиғәт паркының директор урынбаҫары Илсаф Ғәбдиев фекеренсә, проектты ғәмәлгә ашырыу республикала туристик эшмәкәрлекте үҫтереү өсөн нигеҙ буласаҡ һәм әҙәби ҡомартҡыға йәмәгәтселектең иғтибарын йәлеп итәсәк. Экскурсияға килеүселәр әҫәрҙә һүрәтләнгән һәм "Ирәмәл" тәбиғәт паркы топонимикаһында сағылыш тапҡан урындарҙы үҙ күҙҙәре менән күрә аласаҡ.

Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, яңы экскурсия объекты 10 меңгә яҡын туристы йәлеп итәсәк. Проекттың белем биреү һәм социаль файҙаһы ла бар. Унда туристарҙы хеҙмәтләндереү буйынса эш урындары барлыҡҡа киләсәк. Проектты ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә "Ирәмәл" тәбиғәт паркы биләмәһендә экскурсияның конспекты (технологик карта) әҙерләнәсәк. 25 километр оҙонлоғондағы махсус маршрутта туристар өсөн йыһазландырылған туҡтау урындары булдырыу планлаштырыла. Эштәр ағымдағы йылда башҡарыласаҡ. "Ирәмәл" тәбиғәт паркы Белорет, Учалы райондары менән Силәбе өлкәһе сигендә урынлашҡан. Уның майҙаны 49 гектарҙан ашыу тәшкил итә. Эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәре - тәбиғәт комплекстарын һәм уларҙың төрлөлөгөн һаҡлау.

# ЯҢЫҺЫНАН КӘМ ТҮГЕЛ!



**Өфөләге Муниципаль электр транспорты идаралығында трамвайҙарҙы һәм троллейбустарҙы яңырта башланылар. Ремонттан һуң трамвайҙар электр энергияһын 20-40 процентҡа аҙыраҡ ҡуллана.**

Капиталь яңыртыу өсөн тәжрибә рәүешендә 2001 йылда сығарылған 71-402 "СПЕКТР" моделендәге дүрт күсәрле пассажир вагоны файҙаланылған. Уны ремонтлауҙа 10 белгес ҡатнашҡан, эштәр дүрт айҙан һуң тамамланған. Ошо ваҡыт эсендә төп быуындарға һәм агрегаттарға капиталь ремонт яһалған, тормоз системаһы, автоматик идара итеү системаһы яңыртылған, вагонға мейестәр, яңы ултырғыстар, валидатор ҡуйылған. Белгестәр пассажирҙарҙың хәүефһеҙлеге хаҡында ла онотмаған - хәҙер салонда видеокүҙәтеү камералары ла бар. Вагондың эске һәм тышҡы яғы ла буятылған. Яҡтыртыу техникаһы яңыртылған, ишектәр алмаштырылған.

Модернизациялауҙа күсмә состав реостат-контактор идара итеү системаһынан контактор-транзистор системаһына күсерелә. Ҡатмарлы идара итеү механикаһынан баш тартыу ошо системаның өҫтөнлөгө булып тора. Контактор-транзистор системаһы электр энергияһын 20-40 процент сиктәрендә экономиялауҙы тәьмин итә. Мәҫәлән, яңыртыуға тиклем трамвай йылына уртаса 450-460 мең һумлыҡ электр энергияһын ҡулланһа, башҡарылған эштәрҙән һуң - 260 мең самаһы. Һөҙөмтәлә Муниципаль электр транспорты идаралығы яңынынан бер ҙә ҡалышмаған пассажир вагоны эйә булды. Яңыртыуға миллион һумдан ашыу аҡса киткән. Ә яңы вагон 10 миллион һум самаһы тора. Капиталь ремонтланған беренсе трамвай Черниковкала маршрутҡа сыға.

**"БАШИНФОРМ".**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓1 апрелдән 2013-2014 йылдарға Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына дәғүә итеүгә эштәр ҡабул итәлә. Премияға 16-нан 35 йәшкә тиклемгеләр дәғүә итә. Иң күбе биш кешенән торған ижади коллектив та лауреат була ала. Эштәр 1 июлгә тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450000, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 10, 23-сө бүлмә. Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығының талантлы йәштәргә һәм йәштәрҙең башланғыстарына булышлыҡ итеү бүлеге. Белешмә өсөн телефон: (347) 218-03-08.

✓Өфөлә "Илһам" балалар һәм үҫмерҙәр әҙәби конкурсы еңеүселәрен һәм призерҙарын бүләкләнеләр. Бәйгелә 250-нән ашыу уҡыусы ҡатнашты. Конкурс Башҡортостандың баш ҡалаһында икенсе тапҡыр уҙғарыла. Быйыл унда ҡатнашыу өсөн Өфөнән генә түгел, Ейәнсура районынан, шулай уҡ Ямал-Ненец автономиялы округынан да ғаризалар килгән. Эштәр беренсе тапҡыр рус, башҡорт һәм татар телдәрендә ҡабул ителгән. Өфө ҡала Советы рәйесе Евгений Семивеличенко махсус приз булдырған.

✓1-30 апрелдә Башҡортостанда төбәк һәм муниципаль-ара әһәмиәттәге автомобиль юлдарында йөк транспортының хәрәкәте ваҡытлыса сикләнә. 1 июндән 31 августҡа тиклем асфальт-бетон япмалы юлдарҙа ауыр йөк транспорты хәрәкәте сикләнә. Сикләү йәй көнө һауа температураһы 32 градустан юғары булғанда индерелә. Ваҡытлыса сикләү осоронда киске сәғәт 10-дан иртәнге 10-ға тиклем ауыр йөк ташыусы транспорт сараларына йөрөү рөхсәт ителә.

✓10 апрелдә Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы мәҙәниәт йортонда Сәйфулла Дилмөхәмәтов исемендәге призға ҡурайсылар конкурсы ойошторола. Ғаризаларҙы 2015 йылдың 8 апреленә тиклем akyar-rdk@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк. Бәйгенең ойоштороусылары - Хәйбулла районы хакимиәте, мәҙәниәт йорто һәм Ҡурайсылар ойошмаһы. Белешмә өсөн телефон: (34758) 2-13-65.

✓Өфөләге Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгенең Октябрь районындағы филиалы эшһеҙ граждандарҙы һөнәри белем алырға саҡыра. Курстарҙа менеджер, кейем бесеүсе, тегенсе һәм ашнаҡсы һөнәрҙәренә уҡырға була. Теләүселәр Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгенең районындағы филиалына ғариза бирә ала. Адресы: Рәсәй урамы, 108. Белешмә өсөн телефон: 235-51-26, 235-91-59.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?




# БӨЙӨК ЕҢЕҮ ХӨРМӘТЕНӘ

**Рәсәй Федерацияһы Президентының 2015 йылдың 26 февралендәге Указында ҡаралыуынса, Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығы айҡанлы Рәсәй Федерацияһы территорияһында, шулай уҡ Латвия, Литва һәм Эстон Республикаларында йәшәүсе ветерандар бер тапҡыр бирелеүсе түләүҙәр аласаҡ.**

Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары һәм ветерандары, Икенсе донъя һуғышы осоронда фашистар һәм уларҙың союздаштары тарафынан булдырылған концлагерь, гетто һәм мәжбүри тотолған башҡа урындарҙағы балиғ булмаған тотҡондар, Финляндия менән һуғыш осоронда, Бөйөк Ватан һуғышында, Япония менән һуғышта һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең, Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтарының һәм һуғышта ҡатнашыусыларҙың тол ҡатындары һәм тол ирҙәренә 7 мең һум күләмендә аҡса түләнәсәк.

1941 йылдың 22 июненән алып 1945 йылдың 9 майына тиклем алты айҙан да кәм эшләмәгән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына (СССР-ҙың ваҡытлыса баҫып алынған территорияһында эшләгән осорҙо иҫәпләмәйенсә), Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн СССР ордендары һәм миҙалдары менән наградланыусыларға, шулай уҡ нацист концлагерҙары, төрмәләре һәм геттола ул саҡ балиғ йәштә булған тотҡондарға 3 мең һум күләмендә аҡса түләү ҡарала.

Түләүҙәргә ғариза яҙҙырылмай, ул 2015 йылдың апрелендә пенсия менән бергә түләнәсәк.

# СОЦИАЛЬ ПЕНСИЯ ЛА...

**РФ Хөкүмәте Ҡарарына ярашлы, ошо йылдың 1 апреленән республика пенсионерҙарының социаль пенсиялары 10,3 процентҡа арта.**

Бынан тыш, юғары ҡаҙаныштары һәм айырым хеҙмәттәре өсөн (Советтар Союзы, Рәсәй Федерацияһы Геройҙары, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, Ленин ордены менән награданған граждандарҙың һ.б.) һәм "ядерсылар"ҙың, шулай уҡ күләмдәре социаль пенсия күләменә бәйле бөтә төр дәүләт пенсияларының - саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәт үткән хәрби хеҙмәткәрҙәргә инвалидлыҡ буйынса пенсияларҙың һәм уларҙың ғаилә ағзаларының, радиация тәьҫиренә дусар булыусыларҙың өҫтәмә матди тәьмин ителеш күләме лә 10,3 процентҡа артасаҡ. Ике пенсия алыусыларҙың бер төрө - дәүләт пенсияһы артасаҡ.

Республикала артҡандан һуң социаль пенсияның уртаса күләме - 8 262 һум, инвалид балаларҙың социаль пенсияһы 13 163 һум тәшкил итәсәк.

Ике пенсия алыусы хәрби йәрәхәт арҡаһында инвалид булып ҡалғандарҙың һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың уртаса пенсия күләме шуға ярашлы 30 944 һум һәм 31 427 һум буласаҡ.

# ...ТАШЛАМА КҮЛӘМЕ ЛӘ АРТА

**Федераль ташлама менән файҙаланыусыларҙың бөтәһе лә (ветерандар, инвалидтар, радиация тәьҫиренә дусар булған граждандар, Советтар Союзы Геройҙары, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары һ.б. - республикала улар барлығы 350 мең кеше) ошо йылдың 1 апреленән айлыҡ аҡсалата түләүҙәрҙе (ЕДВ) 5,5 процентҡа күберәк аласаҡ.**

Бер үк ваҡытта социаль хеҙмәттәр тупланмаһы менән тәьмин итеүгә йүнәлтелгән аҡсалар суммаһы ла артасаҡ. 1 апрелдән ул 930, 12 һум тәшкил итәсәк, шуларҙың:

- 716, 40 һумы - бушлай дарыу препараттары алыуға;
- 110, 83 һумы - шифаханала дауаланыуға;
- 102,89 һумы - ҡала яны тимер юл һәм ҡалаара транспорттарҙа дауаланыу урынына барып ҡайтыуға.

РФ Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса булексә идарасыһы Фоат Хантимеров билдәләүенсә, 2015 йылдың 1 мартына ҡарата аҡсалата социаль хеҙмәттәр менән файҙаланыусылар һаны 101 168 кеше, йәғни айлыҡ аҡсалата түләүҙәр тәғәйенләнгән кешеләр һанының 29 процентын тәшкил итә. Шуға ярашлы, социаль хеҙмәттәр тупланмаһы алырға хаҡлы граждандарҙың 71 проценты аҡсалата компенсация файҙаһына унан баш тартҡан. Социаль хеҙмәттәр алыу хоҡуғына эйә булған Федераль ташламалар менән файҙаланыусылар ошо йылдың 1 октябренә тиклем социаль хеҙмәттәр тупланмаһы йә уны өлөшләтә алыуҙан баш тартыу йәки социаль хеҙмәттәр менән файҙаланыуҙы дауам иттереү хаҡында Пенсия фондына ғариза яҙырға хоҡуҡлы. Элекке ҡарарҙы үҙгәртҡән осраҡта ғына Пенсия фондына мөрәжәғәт итеү мотлаҡ.

**Башҡортостан буйынса РФ Пенсия фонды бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# ТАҒЫ БЕР ҠЫҘЫУ НӨКТӘ

**Яңы Көнсығыш картаһында тағы ла бер ҡыҙыу нөктә - Йемен барлыҡҡа килде. Был илдәге хәрби-сәйәси хәл күптән тотороҡлоҡтан алыҫ булһа ла, әле күҙәтелгән эре масштаблы хәрби бәрелеш кеүек ситуацияға тиклем барып еткәне юҡ ине.**

Йемен - ислам динле дәүләт, ләкин илдең көньяҡ һәм көнсығышында йәшәүселәр - сөнниселекте, ә төньяҡ-көнбайыштағы зейдиттар шиғисылыҡты үҙ итә. 2004 йылда зейдиттар ил хөкүмәтен АҠШ-ҡа һатылыуҙа һәм зейдит халҡының хоҡуҡтарын ҡыҫыуҙа ғәйепләп сығыш яһай. Имам Хөсәйен Бадр ад-Дин аль-Хуси етәкселегендәге зейдиттар хәрәкәте хуситтар исеме аҫтында билдәле. Хөкүмәт яҡлылар уларҙы республика тәҙәләшән ҡыйратырға теләүҙә һәм Йеменда зейдит имаматы тәҙергә теләүҙә ғәйепләй. Бер-береһенә ҡаршы сыҡҡан ике хәрәкәттә төрлө илдәр һәм ойошмалар яҡлай. Зейдиттарҙың хәрәкәтен шиғисылыҡ ислам динен тотҡан Иран күтәреп сыҡһа, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы уларға ҡаршы сығыш яһай. Был конфликт оҙаҡ ваҡыт ил эсендә генә быҫҡып яна, ләкин 2009 йылда хуситтар Сәғүд Ғәрәбстаны армияһын үҙҙәренә ҡаршы хәрби көс ҡулланыуға алып барып еткерә. Шулай итеп, Аравий ярымутрауының иң ҙур дәүләттәренең береһе һәм сөнниселек донъяһының формаль булмаған лидеры - Сәғүд Ғәрәбстаны - Йемен эсендәге конфликтҡа йәлеп ителә.

2014 йылдың августында Йемен ҡалаларында хуситтарҙың күпләп сығыш яһауҙары башлана һәм улар хөкүмәт биналарын баҫып ала, Дамар, Ибб ҡалаларын ҡулдарына төшөрә. Ағымдағы йылдың ғинуарында илдең баш ҡалаһы Саналағы сыуалыштар, Америкаға ҡаршы ойошторолған митингылар Йемендағы хәлде бермә-бер ҡатмарлаштыра. Ә 1 февралдә илдә хуситтарҙың коалицион хөкүмәт төҙөү талабын күпселек сәйәси партияларҙың яҡлап сығыуы Йемендә фактик рәүештә революция башланыуына ишаралай. Хуситтарға ҡаршы булған сөннiселекте тотоусылар үҙҙәрен Ислам дәүләтенә ҡушылыуҙарын белдерә һәм бер-нисә террористик операция үҙғара. Уларға яуап итеп, хуситтар ил президентының ваҡытлы резиденцияһын авиация утына тота.

БМО илдәге хәлде үҙ контролендә тота алмаған ил президенты Абд Раббо Мансур Хади власының законлылығын таныһа, Йемендә барған ҡан ҡойоштo хәл итеүҙә үҙенең көсһөҙлөгөн күрһәтте һәм конфликтты сисеүҙе Аравий ярымутрауы монархияларына, йәғни АҠШ-тың стратегик партнерҙарына йөкмәтте. Улар, үҙ сиратында, ваҡиғаны оҙаҡҡа һуҙманы. 26 мартта Сәғүд Ғәрәбстаны короле хуситтарға ҡаршы хәрби кампания башлауы тураһында иғлан итте. Уға Ғәрәп Эмираттары берләшмәһе (ОЭА), Кувейт, Бахрейн, Катар, Иордания, Марокко, Мысыр һәм Пакистан да ҡушылды. Йемен шиғисылыҡ оппозицияһын тар-мар итеүгә әҙерләгеп шулай уҡ Судан һәм АҠШ та белдерҙе. Был хәлгә ҡарата төрлө илдәр үҙҙәренең реакцияһын күрһәтмәй ҡалманы. Мәҫәлән, Иран, Сирия, Ливан, Ирак һәм Палестина уларҙы Йемендың эске эштәренә ҡыҫылыуҙа ғәйепләп сығыш яһаны. Иран сәйәсмәне Алаэддин Боруджерди белдереүенсә, Сәғүд Ғәрәбстаны һәм уның союздаштары бөтә мосолман донъяһы мәнфәғәттәрен һанға һуҡмай. Был, ахыр сиктә, Сәғүд Ғәрәбстаны өсөн дә кире һөҙөмтәләргә алып килергә мөмкин, сөнки Йемендағы һуғыш был ил территорияһы сиктәрендә генә ҡалмаясаҡ, тиғән фекерҙә ул. Уның фекеренән инҡар итерлек дәлилдәр юҡ, шуға күрә әлеге ваҡытта Йеменда барған ҡан ҡойош Яҡын Көнсығышта башланасаҡ һәм көньяҡ-көнбайыш Азияның сәйәси картаһына ҙур үҙгәрештәр индерәсәк һуғышҡа алып барыусы тағы бер эпизод икәнлеген танырға ғына ҡала. Шулай ҙа был ҡапма-ҡаршылыҡтың, Рәсәй хөкүмәте өмөт иткәнсә, тыныс юл менән хәл ителеренә ышаныға килә.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Астма

❖ 0,5 л балға 6 лимондың һутын һығырға, 5 баш һарымһаҡты таҙартып, иҙергә һәм барыһын бергә быяла һауытта бутарға, 7 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға. Көнөнә бер тапҡыр, 15-16 сәғәттәрҙә 4-әр балғалаҡ ашарға. Һәр ҡалаҡ араһында 10 минут интервал булырға тейеш. Бер ай буйына ҡабул итергә.

❖ 3 литр һөт әсегәндән һуң барлыҡҡа килгән һыуға 1 стакан бал, 100 грамм ваҡланған андыҙ тамыры өҫтәп, 4 сәғәткә эҫе мейескә ҡуйырға. Һыуытырға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Дауаланыу курсы - 2-4 ай.

❖ 0,2-0,3 грамм мумиены һөткә йәки аҡ майға ҡушып (1:20), иртән - ас ҡарынға, кисен йоҡлар алдынан ашарға.

❖ 0,5 литр 3 йыллыҡ алоэ һутына 0,5 литр бал, 0,5 литр спирт ҡушып, 12-15 көн ҡараңғы урында төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1 ҡалаҡ ҡабул итергә. Әҙерләнгән төнәтмә бөткәс, 1 айҙан дауалау курсын яңынан ҡабатларға.

❖ Ҡайнап ултырған һыуға һуған ҡабығын ташлағыҙ, һыу һары төҫкә инһен. Әгәр ҙә һуған ҡабығын күберәк һалып, төнәтмә ҡөрән төҫкә инһә, уға һыу өҫтәгеҙ. Сәй кеүек эсегеҙ, һалҡын көйө эсергә лә була. Хроник форма алған астманы да дауалай.

❖ Гәрсисте бал менән татлыландырылған һыуға ҡушып эсһән, тын юлдарын таҙарта.

❖ Быума йүтәл менән яфаланыусыларға тирәк, уҫаҡ ағастары эргәһенә бармаҡҡа кәңәш ителә, был ағастарҙың энергетикаһы уларҙың хәлен наҫарайтыуы ихтимал. Шулай уҡ энергияһыҙҙы һурыусы кешеләр эргәһендә йөрөмәгеҙ.

### Баш әйләнһә

Ҡуҙаҡлы ҡыҙыл әсе борос баш әйләнеүенән ҡотҡара. Бер стакан йылы һыуға бер семтем борос һалып болғатығыҙ һәм бәләкәй генә йотомдар менән эсегеҙ. Һыу һәм борос ҡанды "ҡыҙҙырып" ебәрә һәм ҡан яҡшыраҡ йөрөй башлай, шуға ла үҙегеҙҙе яҡшыраҡ тоя башлаясаҡһығыҙ.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ ***Быйылғы конкурста бөтәһе 56 педагог үҙ-ара көс һынашты. Ойоштороусылар бигерәк тә конкурсанттар араһында ир-егеттәр булыуын ыңғай күренеш тип баһаланы.***



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# ИРТӘН - ҮГЕҘҘӘ...

## кисен - ҡуянда

**Башҡорт халыҡ ижадында үгеҙ һыу стихияһы менән бәйле. Күп легендаларҙа һыйыр йәки үгеҙ һыу аҫтынан килеп сыға. "Аҡбуҙат" эпосында аҡбуҙат йылҡы көтөүе менән һыйыр көтөүен дә һыу аҫты батшалығынан үҙе артынан эйәртә.**

З. Әминев фекеренсә, башҡорттар яҙын боҙ киткән саҡта һыу тауышын, боҙ ярылыуын һыу үгеҙе үкереүе тип ҡабул итә. Яҙғы ташҡын мәлендә һыу шаулауын ишеткән ололар бөгөн дә: "Йылға үгеҙе үкерә, ҡорбан һорай", тип әйтә. Ошондай ышаныуҙар төрлө төбәктәрҙә теркәлгән. Мәҫәлән, Яңауыл районында балалар һыу ингәндә йылғанан оҙаҡ сыҡмаһа, уларҙы: "Һыу үгеҙе ала, һыуҙан сығығыҙ", тип иҫкәртәләр.

Космогоник легендаларға ҡараһаҡ, унда ер ҙур үгеҙгә (вариант: үгеҙҙең мөгөҙөндә) тотолоп тора, тигән ышаныуҙар күрербеҙ. Был үгеҙ үҙе ҙур балыҡҡа (вариант: балыҡтың мыйыҡтарына) баҫып тора. Улар ҡыбырлаһа, ер тетрәй икән. Ырымбур өлкәһендә йәшәүсе башҡорттар һөйләгән легенда буйынса, был үгеҙҙең бер мөгөҙө һынған. Уның икенсе мөгөҙө һынғас та, ахыр заман етәсәк. Гәрәй һәм ғәйнәләр раҫлауы буйынса, ахыр заман был космик үгеҙ башын сайҡап, үҙенең мөгөҙҙәренән ерҙе алып ташлағас буласаҡ.

Тағы бер миф буйынса, Тәңре тарафынан ҡоро ер тәүге кешегә океан төбөнән үгеҙ тиреһенә һалып бирелә. Ҙур үгеҙҙең тауҙы (Учалы районы) йәки Ҡатил батшаның һарайын ("Урал батыр" эпосы) терәтеп тора тигән фольклор өлгөләре лә ошо циклға ҡарай. Был ышаныуҙар хәҙистәрҙә лә һүрәтләнә: "Ер үгеҙҙең мөгөҙөндә тотолоп тора, ә үгеҙ балыҡтың өҫтөндә, ә балыҡ һыуҙа..." Монгол, вепс, боронғо индеецтар, шумер мифологияһында ер үҙе үгеҙ йәки һыйыр итеп һүрәтләнә.

Былар барыһы ла тағы ла бер фольклор мотивы - "үгеҙ тиреһе ҙурлығы" ер һатыуға асыҡлыҡ индерә. Йылайыр районында яҙып алынған легендала әйтелеүенсә, рус баяры башҡорттарҙан үгеҙ тиреһе ҙурлыҡ ҡына ер һораған һәм тирене йоҡа ғына итеп телеп, уларҙы бәйләй ҙә, ҙур ғына майҙанды уратып ала. Бындай сюжетты боронғо римдар, скандинавтар, финикийсыларҙа осратырға була. Тирий батшабикәһе Элисса үҙенең ағаһы батша Тирҙың эҙәрлекләүенән ҡасып, Төньяҡ Африка ярына килеп туҡтай һәм ливий батшаһынан үгеҙ тиреһе ҙурлыҡ ҡына ер биреүҙәрен һорай. Батша ризалаша. Элиссаның фарманы буйынса, төнөн был тирене тар ғына киҫәктәргә ҡырҡып, ҙур ғына территорияны алалар. Унда Карфаген ҡалаһы нигеҙләнгән. Был фольклор мотивтарын, моғайын да, борондан ҡайһы бер халыҡтарҙа һаҡланып килгән ерҙең аллегорик образы итеп ҡарарға кәрәк.

Ышаныуҙарҙа үгеҙ изге хайуан булараҡ һүрәтләнә, тигәйнек инде. Ер иртән - үгеҙҙә, кисен ҡуянда һыбай йөрөй, тигәндәрендә лә ошо ышаныу ята. "Күсәк бей" эпосында ла ҡыпсаҡ ырыуы башлығы Күсәк бей бөрйән ырыуын һуғышта еңгәс, уларҙың башлығы Ҡараҡоломбәтте ҡара һыйырға ултыртып алып китә.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ҺӨНӘРСЕЛӘР АРАҺЫНДА...

## һөнәрсе эҙләнде

**Һәр эштә лә һөнәрселәр һәм өйрәнсектәр була, ләкин уҡытыусы һөнәрендә ғүмер буйы өйрәнсек булып йөрөүселәргә урын юҡ. Анығ фәндәрҙән уҡытһынмы, әллә башланғыс белем бирһенме - уҡытыусы һәр саҡ үҙ эшенең белгесе булырға тейеш. Башҡортостанда бына ике тиҫтә йыл үткәрелә килгән "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсы тап шундай үҙ эшенең оҫталарын барлай, баһалай ҙа инде.**



*Конкурс еңеүселәре (һулдан уңға): Айһылыу Фәхриева, Айгөл Игелекова, Фәнис Шәрәфетдинов, Гүзәл Фазылова, Марат Аҙнабаев. Мораҙым МӨХӘМӘТОВ фотоһы.*

Бәйгелә ҡатнашыусы уҡытыусыларҙың ҡаҙаныштарын, үҫешен, эш һөҙөмтәһен күреү бәхетенә эйә булыусы баһалама ағзалары әйтеүенсә, конкурс йылдан-йыл яңы кимәлгә күтәрелә бара.

- Сибай ҡалаһы кимәлендә генә уҙғарыла башлаған конкурс, республика, артабан төбәк-ара ярышҡа әүерелде, - тине баһалама ағзаһы, педагогика фәндәре кандидаты, профессор Вәкил Хажин. - Тәүге өс йылда "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсы халыҡтың рухы күтәрелгән ваҡытҡа тура килеп, майҙанға бик көслө педагогтар сыҡҡайны, хәҙер иһә бында йәштәр килә. Улар белеме, фекерләү ҡеүәһе буйынса тәүгеләрҙән һис ҡалышмай, киреһенсә, техник, теоретик һәм хатта интеллектуаль яҡтан да күпкә юғарыраҡ. Шулай уҡ рухылар, телде белеү кимәле лә кәмемәгән, йылдан-йыл ҡатнашыусылар хөртөрәк әҙерләнерме икән, тип ҡурҡыуыбыҙ ҙа юҡҡа ғына. Хәҙер призлы урындарға һәм номинанттар исемлегенә инмәгән уҡытыусы менән абсолют еңеүсе исеменә лайыҡ булған уҡытыусы араһындағы айырма ер менән күк араһында кеүек түгел, еңеүсене билдәләү ауырлаша. Конкурс педагогтарҙың кимәлен күрһәтеүсе, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының абруйын арттырыусы, әһәмиәтен билдәләүсе, тәжрибә өләшеүсе сара...

Быйылғы конкурста бөтәһе 56 педагог үҙ-ара көс һынашты, улар араһында Ырымбур һәм Ҡурған өлкәләренән килгән башҡорт теле уҡытыусылары ла бар ине. Ойоштороусылар бигерәк тә конкурсанттар араһында ир-егеттәр булыуын ыңғай күренеш тип баһаланы. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - ул балаға тел һәм әҙәбиәт теорияһын өйрәтеүсе генә түгел, ә тәү сиратта, халыҡтың рухи байлығын, милләттең күркәм ғөрөф-ғәҙәттәрен, үҙаңын сабый күңеленә еткереүсе лә, шуға ир-егеттәрҙең дә ошо бурыстарҙан ситтә ҡалмауы ҡыуандыра.

- Был конкурсҡа коллегаларымдың эш тәжрибәһен күрергә, үҙемде күрһәтергә теләп килдем. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын бергә туплаған, осраштырған, аралаштырған ярыш минең өсөн бик фәһемле, яңы асыштарға бай булды. Беҙҙә электрон дәреслектәр, улар менән эшләү бик таралмаған, бында коллегаларымдың һәр сығышын ентекләп тыңлап, эш алымдарын өйрәнеп ҡайтып барам. Әлегә иң борсоғаны - уҡыусыларымды яңы уҡыу әсбаптары, китаптар менән тәьмин итеү мәсьәләһе, улар киләсәктә ыңғай хәл ителер, тип өмөт итәм, - тине тәьҫораттары менән бүлешеп, Ҡурған өлкәһенең Надежденка төп белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы Жәлил Садиҡов. Ырымбур өлкәһенән килеүсе Зөлфиә Кинйәбулатова ла 2001-2004-се йылдарҙа баҫылған дәреслектәр буйынса белем биреүҙәре, Федераль дәүләт стандарттарына ярашлы уҡытыу өсөн яңы әсбаптар һәм программалар кәрәклеге тураһында һөйләне.

Абсолют еңеүсе финалға сығыусы биш педагог - Борай районынан Марат Аҙнабаев, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Айһылыу Фәхриева һәм Гүзәл Фазылова, Өфө ҡалаһынан Фәнис Шәрәфетдинов һәм Айгөл Игелекова араһынан билдәләнде. Баш ҡаланың 71-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фәнис Фәйзулла улы 2015 йылдың иң яҡшы педагогы, тип табылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2015" төбәк-ара конкурсында ҡатнашыусы һәр педагог Зәйнәб Биишева әҫәрендәге һөнәрсе кеүек, кеселекле, кешелекле, үҙ эшенә мөкиббән китеп тоғро хеҙмәт итеүсе, үҫеп килгән быуынға үҙендә булған бар белемен түкмәй-сәсмәй ихлас өйрәтеп ҡалдырырға ынтылыусы шәхес булып сыҡты. Тимәк, туған телебеҙҙең киләсәге өсөн борсолмаҫҡа, "отималләштереү", "глобалләштереү", "көрсөк" тигән диңгеҙҙәрҙә юғалып ҡалмаҫлыҡ көсөбөҙ барлығын тойоп йәшәргә мөмкин әле.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ЗӘҢГӘР ТӨҪТӘ ЯҠТЫРТ!



**БМО-ның Генераль ассамблеяһы резолюцияһына ярашлы, 2008 йылдан башлап апрель башы Бөтөн донъя аутизм проблемалары тураһында мәғлүмәт таратыу көнө булараҡ билдәләнә. Уның маҡсаты - аутизм һәм аутистик спектр сирҙәре менән яфаланған кешеләргә ярҙам итеү кәрәклегенә тағы бер тапҡыр иғтибар йүнәлтеү.**

Аутизм - психик үҫештең ауыр кимәлдәге боҙолоуы (кешенең тышҡы донъя менән ҡыҙыҡһынмай, үҙ-үҙенә бикләнеп, үҙенең эске кисерештәренә, хыялдарына сумып йәшәүе). Был осраҡта кешенең аралашыу, социаль хеҙмәттәшлек һәләте зыян күрә. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, бөгөнгә 88 баланың береһендә шундай тайпылыштар күҙәтелә. Был шәкәр сире, СПИД, яман шеш, церебраль фалиж, миопатия, Даун синдромы менән ауырыусыларҙың дөйөм һанынан да күберәк. Һуңғы биш йылдағы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, аутизм осрағының 78 процентҡа артыуы күҙәтелә. Аутизм сирлеләрҙең мейеһенең күп өлөшөндә үҙгәрештәр була, әммә уларҙың нисек итеп үҫешеүе әлегә билдәһеҙ. Сәләмәт кеше менән сағыштырғанда, аутизм сирлеләрҙең нервы функциялары өсөн яуаплы булған мейенең префронталь ҡабығындағы нейрондар 67 тапҡырға күберәк. Был хәл мейегә үҙ эшен тәбиғи рәүештә башҡарырға ҡамасаулай.

Аутизм өс төп симптом буйынса билдәләнә: социаль мөнәсәбәттәрҙең етешмәүе, үҙ-ара коммуникация боҙолоуы, ҡыҙыҡһыныуҙар сикле булыуы һәм был күренештәрҙең даими ҡабатланып тороуы. Быға оҡшаш билдәләр һәм симптомдар бик асыҡ сағылмаһа, уларҙы аутистик спектрҙың еңелсә боҙолоуы тип билдәләйҙәр. Ләкин был осраҡ та баланың мөхит менән тейешенсә мөнәсәбәткә инә алмауын күрһәтә. Барлыҡ был билдәләр балала өс йәшкә тиклем сағылыш таба. Уны ни тиклем иртә асыҡлап, тиҙерәк ярҙам күрһәтеү 60 процент осраҡта уларҙың йәмғиәттә башҡалар һымаҡ үҫешеү һәм йәшәү мөмкинлеген бирә.

Баш ҡалабыҙ Өфө лә ошо көндә Light It Up Blue - "Зәңгәр төҫтә яҡтырт!" халыҡ-ара акцияһына ҡушылды. Акция барышында бөтөн донъя буйынса административ биналар, тарихи һәм тәбиғи һәйкәлдәр, мәҙәни объекттар, ҙур сауҙа үҙәктәре аутизмдың халыҡ-ара символы булған зәңгәр төҫкә мансыла. Ошоно күҙҙә тотоп, Өфөлә лә ҡайһы бер объекттар - милли батырыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәле һәм Республика йорто зәңгәр төҫкә мансылды. "МЕГА Өфө" ғаилә сауҙа үҙәгендә тематик фотокүргәҙмә асылып, унда ижади оҫталыҡ дәрестәре үткәрелде, ҡатнашыусыларға зәңгәр төҫтәге шарҙар таратылды. "ВДНХ" сауҙа-күргәҙмә комплексында иһә махсус стенд урынлаштырылды. "Родина" кинотеатрында флешмоб үтте, бина фойеһында аутизм менән ауырыусы балаларҙың да башҡалар кеүек үк бала икәнлеген сағылдырған фотокүргәҙмә ойошторолдо.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Баймаҡ районы хакимиәте менән берлектә Темәс ауылында Башҡорт совет автономияһы тураһындағы килешеүгә - 96 йыл, бөйөк башҡорт шағиры Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы фәнни-ғәмәли конференция үткәрҙе. Уның эшендә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Х. Х. Ишморатов, район хакимиәте башлығы И. Х. Ситдиҡов, Ҡоролтайҙың башҡа ағзалары, тарихсы-ғалимдар ҡатнашты.**

# ТЕМӘС АУЫЛЫНДА...

## Вәлиди, Бабич эҙҙәре




Темәс - Башҡортостан тарихында үҙәк урындарҙың береһен алып торған ауыл. 1919 йылда бында Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы төҙөлә. 18 февралдә тап ошо ауылда Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендәге башҡорт ғәскәре ҡыҙылдар яғына күсә. Ә 21 февралдә бында беренсе башҡорт хәрби съезы үтә һәм Башҡорт Хөкүмәте вәкәләттәренә эйә булған Ваҡытлы революцион комитет (Башревком) төҙөлә. Бөтә Рәсәй үҙәк башҡарма комитеты ҡарары менән Темәс Башҡортостандың беренсе баш ҡалаһы тип иғлан ителә. Бөтөн ошо ваҡиғалар тетрәндереп тә, тулҡынландырып та, ғорурландырып та күҙ алдынан үтте Темәстәге музейҙа үткәрелгән экскурсия мәлендә.

Артабан Баймаҡ районынан ғына түгел, Өфөнән, күрше Әбйәлил, Бөрйән, Хәйбулла, Йылайыр райондарынан, Сибай ҡалаһынан килгән вәкилдәр музейҙа сағылдырылған тарихи ваҡиғаларға тағы бер тапҡыр байҡау яһау, анығлау, иҫкә төшөрөү өсөн мәҙәниәт йортона йыйылды. Фәнни-ғәмәли конференцияла билдәләнеүенсә, Башҡортостанда милли дәүләт төҙөү эше 1917 йылдың июль (Ырымбур) - август (Өфө) айҙарында уҙған Беренсе һәм Икенсе башҡорт ҡоролтайҙары менән башланып китә. Был съездарҙа тәү сиратта ерле автономия мәсьәләләре ҡарала. Ҡоролтайҙарҙы ойоштороу эшенә, төрлө ҡарарҙар ҡабул итеүгә Әхмәтзәки Вәлиди бик күп көс һала, башҡорт милли хәрәкәтенең етәксеһе, төп идеологы була.

Шуны ла билдәләргә кәрәк: совет тарих фәне 1917 йылғы башҡорт милли хәрәкәтенә революцияға ҡаршы, реакцион булған, тип баһа бирә, башҡорт хәрәкәтен, халыҡ менән нықлы бәйләнеше булмаған һәм тик буржуаз-юғары ҡатлам мәнфәғәттәрендә ойошторолған, тип иҫбатларға тырыша. Был осраҡта улар башҡорт халҡының сәйәси һәм иҡтисади үсеш кимәлен инҡар итергә маташа. Имеш, үҙбилдәләнеш идеяһы ярымкүсмә тормош алып барған башҡорттар өсөн буй етмәслек бейеклек булған. Башҡорт халҡының тарихи традициялары, быуаттар дауамында үҙенең ерен һәм азатлығын, хоҡуҡтарын яҡлап көрәшеүе бөтөнләй иҫәпкә алынмай. Башҡорттарға автономияны Октябрь революцияһы, большевиктар бирҙе, тигән фекер алға һөрөлә. Был ҡараш ҡайһы бер тарихсылар һәм публицистар араһында хәҙерге көндә лә йәшәп килә. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең Февраль революцияһынан һуң барлыҡҡа килеүе, тәүге ҡоролтайҙар үтеүе һәм автономия, үҙбилдәләнеш мәсьәләләре Ваҡытлы хөкүмәт алдына ла ҡуйылыуы бындай фекерҙең ысынбарлыҡҡа тап килмәүен күрһәтә. Әммә Башҡорт автономияһын төҙөү тарихын объектив рәүештә һүрәтләү һәр төрлө уйҙырмаларҙы фашларға төплө нигеҙ бирә. Был фарман "Ырымбур губернаһының Шадринск, Екатеринбург өйәҙҙәре башҡорттарына, округ һәм район башҡорт шураларына" тип атала һәм Ырымбур, Өфө, Пермь, Һамар губерналары сиктәрендә Башҡортостандың ерле автономияһын иғлан итә. Башҡорт халҡы автономия иғлан итеүҙе ҙур шатлыҡ, оло күәныс менән ҡаршы ала. Темәс, Мораптал, Борай һәм башҡа ҙур башҡорт ауылдарында, Бөрөлә ошо айҡанлы йыйылыштар ойошторола һәм Ырымбурға ҡотлау хаттары, телеграммалар ебәрелә. Халҡыбыҙҙың бөйөк шағиры, Үҙәк шураның сәркәтибе Шәйехзада Бабич ерле автономия иғлан итеүгә үҙенең "Олуғ шатлыҡ" шиғырын бағышлай. Уның был шиғыры Башҡорт шураһының баҫма органы булған "Башҡорт" гәзитендә 1917 йылдың 24 ноябрь һанында донъя күрә.

Ошо ваҡиғанан һуң башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре шунда уҡ Бөтөн башҡорт ҡоролтайын саҡырыу буйынса әүҙем эш башлай. 1917 йылдың 8-20 декабрендә Ырымбурҙа үткән III Бөтөн башҡорт ҡоролтайы Башҡортостандың үҙбилдәләнеше, йәғни ерле автономияһы буйынса ҡарар ҡабул итә: "Ҡоролтай бер тауыштан 15 ноябрҙә Үҙәк башҡорт шураһы тарафынан иғлан ителгән Башҡортостан территориаль-милли автономияһын раҫлай" тип белдерелә унда. Ҡоролтайҙың "Бөтөн Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостандың шул федерацияға мөнәсәбәте" исемле резолюцияһы менән ил кимәлендә беренселәрҙән булып федерализм проблемаһы күтәрелә. Уның буйынса Башҡортостан Рәсәй Федерацияһының автономиялы өлөшө булараҡ таныла һәм Үҙәк власть уны закон нигеҙендә рәсми раҫларға тейеш була. Ойоштороу ҡоролтайында автономияның билдәмәләре туғыҙ кантонға бүленә. Ҡоролтайҙа шулай уҡ закондар сығарыусы һәм башҡарма власть органдары ла төҙөлә. "Кесе Ҡоролтай" тип аталған автономия предпарламенты ойошторолоп, ул закондар сығарыу вәкәләтенә эйә була. Предпарламент беренсе Башҡорт хөкүмәтен төҙөй. Уның рәйесе итеп юғары белемле юрист Юныс Бикбов тәғәйенләнә. З. Вәлиди, Хөкүмәт ағзаһы булараҡ, хәрби һәм эске эштәр бүлеген етәкләй, И. Мутин - финанс, Ғ. Айытбаев - ер эштәре, Ғ. Әҙеһәмов - халыҡ мәғарифы, Х. Йомағолов иҡтисад бүлектәренә етәкселек итә. Ғ. Ҡыуатов һәм А. Йәғәфәров юстиция һәм эске эштәр бүлектәрендә урынбаҫар вазифаһын башҡарырға тейеш була. Ҡоролтайҙың милли ғәскәр, дини идара төҙөүгә ҡағылышлы ҡарарҙары ла айырым иғтибарға лайыҡ. 1918 йылдың башында демократик принциптарға нигеҙләнгән Башҡортостандың беренсе Конституцияһы төҙөлә. Шулай итеп, Башҡортостан Республикаһының төҙөлөү тарихына иғтибар итһәк, ул Рәсәйҙең федератив ҡоролошоноң нигеҙен тәшкил иткән субъект булды һәм буласаҡ. Рәсәйҙә ошо ҡоролошто нығытыу һәм үҫтереү, халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә булған хоҡуғын таныу барлыҡ милләттәргә үсеш өсөн гарантия биргән берҙән-бер юл булыуын һис иҫтән сығарырға ярамай...

Пленар өлөштән һуң конференция үҙ эшен секцияларға бүлеп дауам итте. Артабан иһә сараға йыйылыусылар тағы ла нығыраҡ тулҡынландырған ваҡиғаға шаһит булды: Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенттары Шәйехзада Бабичтың ижадынан ҡоролған театрлаштырылған тамаша тәҡдим итте. Был уҡыу йортонан уҡытыусылары Таңсулпан Бабичева менән Гөлсәсәк Саламатова беренсе тапҡыр ғына ойоштормай бындай сараны. Һәр хәлдә, шиғри тамашанан театрҙарҙа ҡуйылған телнәниндәй спектаклдән дә тәьсирлерәк тәрбиәүи сара икәнен раҫлай йөрөй улар. Уны әлеге конференцияла ҡатнашыусылар ҙа юғары баһаланы: "Һәр ауылда, һәр ҡалала күрергә тейештәр бындай тамашаны!" тигән һығымта яһаны һәр кем.

**Гүзәл СӘЛИХОВА.**

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Исламға тиклем булған дини йолаларҙың сағылышы

Башҡорттарҙың күҙаллауҙары буйынса, сирҙәр тере йән, ҡайһы берҙә хатта антропоморф булған. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары һөйләүенсә, тапма сирен башына һеләүһен башлығы кейгән кеше образында күрергә тура килгән. Сир бик йыш хайуандар төрөн алған, бик йыш был образ һайыҫҡан булған. Ҡайһы бер осраҡта ауырыуҙар үҙҙәре уҡ кешегә ингән. Айырым осраҡтарҙа уларҙы сихырсылар ебәргән.

Башҡорттарҙың ауырыуҙар тураһындағы боронғо күҙаллауы уларҙы дауалау ысулдарын ҡарағанда асығыраҡ төҫмөрләнә. Бүсер - бармаҡ, ҡайһы берҙә йөҙөроҡ ҙурлығындағы ашҡаҙанда ауыртыныу тыуҙырып, эсәктәр буйлап йөрөгән аҡ төйөр. Осоҡсолар уны йылытып, ауыртҡан урынды ыуып йомшартып, тәндән йолҡоп алған. Шулай уҡ дауалаусылар арҡа һәм күкрәктән дә ауырыуҙарҙы тартып алған. Кешегә насар йәндәрҙең күсеп ултырыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ауырыуҙарҙы бағыусылар дауалаған. Ауырыуҙан һаҡлау, унан арыныу өсөн Урал башҡорттары муйындарына, бигерәк тә балаларға, Ҡөрьән аяттары яҙылған бетеү, айыу тырнағы, айыу теше таҡҡан. Был осраҡта айыуҙың үҙенән ҡурҡҡан кеүек, ауырыу ҙа сирле кешене ташлап киткән.

Башҡорттарҙа ауырыу ебәргән рухты йәки антропоморф сирҙең үҙен шәфҡәтләндереүгә нигеҙләнгән дауалар ҙа булған. Ғәйнә башҡорттары һөйләүенсә, ауырыуға килгән бағыусы сирленән ҡайһы ерҙә, ниндәй ерҙә йөрөүен һорашып, шул урында уға ауырыу йәбешеүен асыҡлаған. Урынды белгәс, ул ошо урынға ярма, ит йәки башҡа берәй ризыҡ һалынған һауытты алып барып ултыртҡан. Йәнәһе, ауырыу ебәреүсе йән шәфҡәтләнеп китеп, ауырыуҙы кире ала. Был һауыттарға берәү ҙә теймәгән, сөнки ауырыу үҙенә күсә тип ҡурҡҡан.

Дүрт-биш йәшлек бала яландан йәки урмандан илап ҡайтып инеп, һуңынан ауырыған осраҡтар ҙа булған. Ул ваҡытта әсәһе уның күлдәген систереп алып, уны бер нисә тапҡыр балаһының кәүҙәһен уратып йөрөткән дә, былай тип һамаҡлаған: "Уйнама, баланы ҡалдыр". Һуңынан күлдәкте юл сатына алып барып ташлаған. Үҙенә сир алмаҫ өсөн, берәү ҙә уға хатта ҡағылмаған да.

Урал аръяғы башҡорттарында бағыусылар сирле кеше менән уға ауырыу ингән насар ергә - бысраҡ нәмәләр түгелгән суплеккә, башҡа урындарға барып, сирҙе әпсен-төпсөнләп, уға йомортҡа, энә, башҡа предмет, хатта кейем ырғыта. Ауырыу килгән юлынан түгел, икенсе юлдан ҡайтырға һәм юлында осраған берәү менән дә һөйләшмәҫкә тейеш була.

Сирҙе анығ йән эйәһе тип күҙаллау тапманы дауалау ысулдарында асыҡ сағыла. Ауырыу ас ҡарынға бутҡа һалынған көршәкте алып яланға сығып йәки йылға аръягына барып уны ергә ултырта ла, ауыҙын аса. Ас тапма бутҡаға ташлана, ә сирле өйөнә табан йүгерә йәки йылғаны кисә, юл яҙылыҡҡан тапма уны тота алмай. Әгәр сирле йылға аша сыҡмаһа, ҡайҙалыр икенсе яҡҡа йүгерә һәм өс көн өйөнә ҡайтмай. Йәнәһе лә, тапма ауылға кире килеп уны эҙләп ҡарай, әммә тапмай.

Ҡайһы бер урындарҙа тапманы дауалау өсөн сирлене йәшен атҡан ағас ыҫы менән төтәҫләгәндәр.

*✓ Яҙыусыларҙың матди хәлен хәстәрләү кәрәк. Юғиһә, нефтсе, тиһәң, һәр ваҡыт затлы йортта йәшәгән, затлы машинала йөрөгән кеше күҙ алдына килтерелә. Яҙыусы тиһәң, ятаҡта йәшәгән кеше күҙ алдына килә.*



# КЕШЕЛӘР

## тормоштағы хаталар ҙа

**Бөгөнгө ҡоробоҙҙа әҙәбиәт донъяһы, йәш ижадсылар, шиғриәт мәктәбе, заманыбыҙ әҙиптәрен борсоған ҡайһы бер башҡа мәсьәләләр тураһында һүҙ барасаҡ. Ҡунаҡтарыбыҙ - билдәле шағирә, Ш. Бабич исемендәге Республика йәштәр премияһы лауреаты Лариса АБДУЛЛИНА, йәш прозаик Айгиз БАЙМӨХӘМӘТОВ һәм йәш шағир Ринат СӨЛӘЙМӘНОВ булыр.**

**▸ Һәр кем теге йәки был төшөнсәне, күренеште үҙенсә аңлай, үҙенсә ҡабул итә. Һеҙ, йәш ижадсылар, мәҫәлән, әҙәбиәт төшөнсәһенә ниндәйерәк аңлатма бирерһегеҙ?**

**Л. Абдуллина:** Әҙәбиәт - донъяның тотҡаһы. Кеше ғүмере ҡыҫҡа ғына. Ошо ваҡыт арауығында донъяның асылын аңларға, тойорға тырышыу теләге менән яна бәндә. Әҙәбиәт тә , китап та - Йыһанды, йәшәйеште, кешелекте танып-белеү ысулдарының иң шәбе.

Ил башлыҡтары, ниһайәт, Әҙәбиәт йылын иғлан итте. Ә үҙ заманында "мәҙәниәт - һуңынан" тигән етәкселәр ҙә булманы түгел бит. Шуға, әҙәбиәткә тотош йылды бағышлау - үҙенә күрә ҙур ваҡиға ул, минеңсә. Әммә шуны ла оноторға ярамай: тарих дәүмәленән ҡарағанда был бер йыл бик бәләкәй осор. Нисек кенә булмаһын, шул осорҙа яҙыусылар халыҡтың күңелендә ятҡан ҡуҙҙарҙы ҡуҙғытып ебәрерлек китаптар сығара, уларҙы кемгәлер бүләк итә, йә булмаһа, кемдеңдер иғтибарын китапҡа йүнәлтә алһа, был - ошо йылдың иң ҙур ҡаҙанышы булыр ине. Әҙәбиәт йылында бөйөк әҫәрҙәр тыуыр, тип уйлай икән кемдер, уларҙың да яңылышыуы бар. Бөйөк әҫәрҙәр бер йылда ғына ижад ителмәй. Йәшерен-батырыны юҡ: беҙ башҡорттоң төп китабы "Урал батыр" эпосынан уҙып, унан да бөйөгөрәк әҫәр ижад итә лә алмабыҙ. Шулай ҙа, һәр әҙип үҙенең заманын йырларға, кешелекте һәм үҙенең замандаштарын мөмкин тиклем алғараҡ алып барырлыҡ яҡты идеялар менән янырға тейеш. Беҙгә Урал батыр төп васыятын да әйтеп ҡалдырған: "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ. Яманға юл ҡуймағыҙ, яҡшынан баш тартмағыҙ". Әҙәбиәттең төп тәғлимәте - ошо. Беҙҙең шундай мәшһүр әҫәребеҙ бар. Шуға күрә, кемдер берәй әҫәр тураһында: "Бына, исмаһам, был шәп, бөйөк әҫәр!" ти икән, ул күпмелер дәрәжәлә хаҡлы булһа ла, асылда, хаҡлы булмаҫҡа ла мөмкин. Был әҫәр үҙ заманының даһи әҫәре булыуы мөмкин ул, шул уҡ ваҡытта, бер шиғырҙа әйтелгәнсә, "Берәү ҙә түгел әллә кем, берәү ҙә түгел даһи. "Бөйөк" тигән "диагноз"-ды ваҡыт ҡуя, билләһи", тиергә генә ҡала.

Һин ижадыңда ғына матур һүҙҙәр һөйләп, матур рифмалар ҡойоп йәшәргә мөмкинһең. Әммә әҙәбиәт иманы иң тәүҙә һинең йөрәгеңдә булырға тейеш. "Әҙип һәм әҙәбиәт бер тамырҙан яралған", тип яҙғайны Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ғайса Хөсәйенов та. Әҙәбиәт - кешелекте алға әйҙәрлек, кешелекте яҡты юлға баҫтырырлыҡ, шәхестең эске донъяһын, күңелен өйрәнгән тәрән эстетик институттыр, тип уйлайым.

**Р. Сөләймәнов:** Миңә ҡалһа, әҙәбиәт - үҙе бер тотош донъя ул. Йәғни, донъя үҙе үк кемдеңдер ижад емеше, әҫәре, тимәксемен. Әйтәйек, ғаләмдә үҙгәрмәҫ ҡанундар булған кеүек, әҙәбиәттә лә күптән барлыҡҡа килтерелгән ҡанундар хөкөм һөрә. Шиғриәттә, классик шиғриәттә, ритм нисек урынлы файҙаланылһа, ғаләмдең дә үҙ ритмы һәр саҡ үҙ урынында. Икенсе яҡтан, әҙәбиәттән дә, ғаләмдән дә ябай кеше аңлата алмаҫлыҡ серҙәр, мөғжизәләр бөркөлөп тора. Әҙәбиәттең иң төп мөғжизәһе нимә? Ул уҡыусының күҙ алдында тотош бер донъяны барлыҡҡа килтереү һәләтенә, мөмкинлегенә эйә. Ахырҙа: "Ә беҙ, кешеләр, ниндәйҙер бер ижадсының ғәйәт ҙур күләмле әҫәрендә хәрәкәт иткән геройҙар түгелме?" - тип тә уйлап ҡуяһың.

Әҙәбиәтте, анығыраҡ әйткәндә, бөгөнгө әҙәбиәтте ике төркөмгә бүлергә булыр ине. Беренсеһе - профессиональ әҙәбиәт булһа, икенсеһе - коммерция юлы менән яҙылған әҙәбиәт. Шулай ҙа, был бүленеш башҡорт әҙәбиәтендә бик үк күҙгә салынып бармай. Бөгөнгө әҙәбиәт һәләт һәм коммерция ҡапма-ҡаршылығын үҙ елкәһендә кисерә.

**А. Баймөхәмәтов:** Әҙәбиәт - тормош мәктәбе. Ул кешелектең бөтөн тармаҡтарын да үҙ эсенә алған өлкә. Тормош юлы ҡатмарлы: теләйме, теләмәйме, кеше ҡайһы саҡ хаталы аҙымдар ҙа эшләп ҡуя. Әммә һәр кемгә хаталанырға тимәгән. Әҙәбиәт кешене хаталарҙан ҡотҡара торған аҡыл сығанағы ла. Кешеләр китапты күберәк уҡыһа, бәлки, тормоштағы хаталар ҙа әҙерәк булмаҫ инеме икән? 2003 йылда Дағстандың халыҡ шағиры Рәсүл Ғамзатов ил Президенты Владимир Путин менән осрашҡанында: "Әҙәбиәттең яҙмышын йөҙөм яҙмышы менән сағыштырыр инем. Заманында "ҡоро закон" иғлан итеп, бөтөн йөҙөмдө тамыры менән йолҡоп бөтөрҙөләр. Ваҡыт үтеү менән йөҙөмдө шарап эшләү өсөн генә түгел, башҡа маҡсат менән дә файҙаланырға кәрәк икәнлеген аңланылар. Заманында әҙәбиәттең баһаһын да кинәт төшөрҙөләр ҙә, ваҡыт үтеү менән уның кәрәклеген аңланылар", - тип әйткән. Быйылғы йылды Әҙәбиәт йылы тип иғлан итеүгә лә ошондай аңлау булышлыҡ итмәнеме икән, тип ышанғы килә...

**▸ Ижад кешеһенең дәрәжәһен ижадының халыҡсанлығы ла билдәләй. Ни өсөн беҙҙең әҙиптәр замана касафатына - аҡса өсөн генә яҙыу һымаҡ күренешкә бирешмәй? Аҡса өсөн яҙыу "оҫталығы" менән ысын әҫәр яҙыу һәләте бергә йәшәй аламы?**

**Л. Абдуллина:** Кешелә был ике һәләт бер ыңғай йәшәй алмай. Ғөмүмән, башҡорттар донъяға сәнғәт күҙлегенән ҡараған милләт һәм улар донъяны образлы ҡабул итә. Мин ауылға ҡайтһам, шуға һөйөнәм: халыҡтың телмәре мәҡәлдәргә бай, шиғыр менән генә һөйләшеүселәр ҙә бар. Тағы бер ҡыҙыҡ күренеш: ауылда һәр кемдең ҡушаматы бар, ҡушаматы хатта уның ысын исемен оноттора. Ә бит был ҡушаматтар нигеҙендә тотош тарих ята. Башҡорттар, ысынлап та, шул тиклем талантлы халыҡ һәм улар үҙҙәренең моңға ынтылышын, моңға табыныуын бер ҡасан да аҡсаға алыштырмаған. Шуға күрә лә милләтебеҙ ниндәй генә заман касафаттарын да, афәттәрен дә еңеп сыға алған. Ә төрлө яуҙарҙа, йә булмаһа, аслыҡ йылдарында иң күп ҡырылған халыҡ - башҡорттар булмағанмы ни? Әммә халыҡ йәшәп килә. Ана шул моңға тоғролоҡ рухи тамырҙарға беҙҙе нығыраҡ йәбештереп тора һәм халыҡ, Зәки Вәлиди әйтмешләй, аҡтамырҙай яңынан ҡалҡа ла китә. Донъя цивилизацияһы сүплегендә шундай халыҡтар бар - улар ҙур дәүләттәр төҙөгән, әммә ниндәйҙер бер дәүер осоронда илаһи моңдо, рухиәтте матдилыҡҡа алыштырған. Әммә быны тарих бер ҡасан да ғәфү итмәй. Ундай ҡәүемдәр донъя тарихынан юҡҡа сыҡҡан. Кешене кеше иткән нәмә - тере моң. Шиғыр ҙа рифмаларға ҡоролоп, ҡурсаҡ һымаҡ мап-матур итеп яҙылһа ла, кәнфит кеүек булһа ла, тере булмаҫҡа мөмкин. Әлеге лә баяғы, моңо булмаһа...

**Р. Сөләймәнов:** Ирмен тигән ир кеше ғаиләһен ҡарар өсөн аҡса эшләргә лә тейеш, тигәнде лә беләбеҙ. Шуны иҫәпкә алғанда, шиғыр яҙып ҡына тамаҡ туйҙырып булмай бит, шуға әҙиптәргә ике яҡҡа ла һуғылырға тура килмәҫме, тип тә уйланыла...

**Л. Абдуллина:** Барыбер һинең шиғриәтеңдә мөхәббәт һәм моң булырға тейеш. Әгәр һинең күңелеңдә моң, мөхәббәт бар икән, Хоҙай Тәғәлә барыбер әжерен бирә. Мәҫәлән, әгәр мин шиғыр яҙмаған булһам, Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Өфөлә мәңге фатир аласағым юҡ ине. Шиғыр аша, Бабич премияһы аша асылды миңә Өфөбөҙҙөң түрҙәре. Эшҡыуарлыҡ юлы менән китһәм дә хур булмаҫ инем, бәлки. Ул да насар юл түгел. Беҙҙең милләттәштәр араһында эшҡыуарҙар ҙа булһын ул. Иң мөһиме, үҙеңә хыянат итергә ярамай. Бөтә нәмә мөхәббәт менән эшләнергә тейеш.

**Р. Сөләймәнов:** Был турала уйланыуҙарым бер бөгөн генә түгел. Ҡайһы саҡта кешеләрҙең ике йөҙлөлөгөн күреп: "Яһалма аҙыҡ-түлек ашап, әллә кешеләр үҙҙәре лә яһалмаға әүерелдеме? Ҡоролоҡ арҡаһында, күңелдәр киптеме?" - тип тә уйлап ҡуяһың. Шул ваҡытта, кешеләрҙән бик ныҡ төңөлөп киткән саҡтарҙа, ярҙамға әлеге лә баяғы шиғриәт килә. Шиғриәт менән бәйле кешеләр ошондай заманда ла үҙендә шиғыр яҙырлыҡ көс таба икән, уларҙы ошо ҡоро климатта үҫеп сыҡҡан ағастар менән сағыштырырға булалыр.

**Л. Абдуллина:** Шағирҙар - шишмәләр. Улар, киреһенсә, һуғара. Шишмәләр ҡороған саҡта ла шағирҙарҙың күңел шишмәләре ҡорорға тейеш түгел.

**▸ Бер аҡыл эйәһе "Һәләтһеҙҙәр үҙҙәренә үҙҙәре юл яра, ә һәләтлеләргә ярҙам итергә кәрәк", тигән. Һеҙ үҙегеҙҙә шундай ярҙамды тояһығыҙмы? Һәләтле булып та, ижад итергә ҡамасаулаған күренештәр булыуы мөмкин бит инде ул...**

**А. Баймөхәмәтов:** З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә "Йәштәр тауышы" серияһы ун йылдан ашыу уңышлы баҫылып килә. Был - йәш кешегә китап сығарыу мөмкинлеге биргән серия. Тәүге китабыңды сығарыу йәһәтенән әллә ни ҡатмарлылыҡ юҡ һымаҡ. Әҫәрҙәреңде матбуғатта баҫтырыуы ла ҡыйын түгел. Халыҡҡа үтемле әҫәрең булһа, теләгән матбуғат баҫмаһына тәҡдим итә алаһың. Оло ағайҙарыбыҙ, апайҙарыбыҙ кәрәк саҡта йылы һүҙен, кәңәшен дә әйтә. Оло быуын яҙыусыларына рәхмәтлемен. Йәш яҙыусыларға, әлбиттә, ҡыйынлыҡтар ҙа бар. Прозаик Рәшит Солтангәрәев: "Яҙыусыға, бигерәк тә, прозаик кешегә, гәзиттә 5 йылдан артыҡ эшләргә ярамай, сөнки ул ижадҡа ҡамасаулай", - тип әйткән. Ысынлап та, матбуғатта эшләгән кешенең күпселек ваҡыты һәйбәт әҫәр яҙыу хыялы менән үтәлер инде ул. Сөнки, яҙам тиһәң, ваҡытың юҡ: мәҡәлә яҙырға кәрәк. Һеҙҙең менән шулай булғаны юҡмы, Лариса апай?

**Л. Абдуллина:** Эйе, гәзит конвейер һымаҡ. Әхмәр Үтәбай миңә бер тапҡыр: "Шиғырҙарыңа, поэмаларыңа һалыр образдарыңды мәҡәләләреңә һалаһың", - тигәйне. Дөрөҫ. Әммә был зарланыу ҙа түгел, ә ысынбарлыҡ. Ир-егеттәр шундай эш хаҡына, биш, ун йылға бер сыҡҡан китап гонорарына ғына нисек риза булып йәшәй икән, тип тә уйланғаным бар. Ҡатынҡыҙға ул йәһәттән еңелерәк - аҡса тапҡан ире бар. Әҙәбиәт йылында шуны ишетке килә: беҙҙең Дамир Шәрәфетдинов фатирһыҙ йөрөй. Уны белмәгән кеше юҡтыр инде хәҙер. Ниндәй ауылға барып төш - уны башҡорто ла, урыҫы ла, татары ла белә. Әммә ул ғаиләһе менән студент ятағының бәләкәй генә бер бүлмәһендә йәшәй. Ә күпме йәштәр фатирһыҙ... Союзға алынған йәштәрҙең фатир мәсьәләһен хәстәрләргә кәрәк. Ҡыйыҡ - иң мөһиме.

**А. Баймөхәмәтов:** Бер билдәле шағир ағай: "Ярай ҙа минең ҡатыным тыныс - аҙ эш хаҡы алаһың, тип әрләмәй. Шуныһы рәхәт", - тип әйткән, тиҙәр. Ысынлап та, ижадсының хеҙмәтен баһалап та бөтмәйҙәрҙер. Йәштәрҙең генә түгел, бөтөн яҙыусыларҙың матди хәлен хәстәрләү кәрәк. Элек Аҡмулла, арбаһын һөйрәтеп, ауылдан-ауылға йөрөп, кешеләрҙең тимер һауыттарын йүнәтеп, үҙенә шулай аҡса эшләп йөрөгән заман түгел бит хәҙер. Яҙыусы хәлле булырға тейеш. Юғиһә, нефтсе, тиһәң, һәр ваҡыт затлы йортта йәшәгән, затлы машинала йөрөгән кеше күҙ алдына килтерелә. Яҙыусы тиһәң, ятаҡта йәшәгән кеше күҙ алдына килә.

**Р. Сөләймәнов:** Бер танышыма яңыраҡ ипотекаға бүлмә алыуыбыҙ тураһында әйткәйнем, ул: "Һис юғы, Шамониндан йорт биреүҙәрен һора, йөрөргә кәрәк, һорай белмәйһең", - тимәһенме. Мин уның дөрөҫ әйткәнен дә беләм, әммә: "Ике аяғым, ике ҡулым һау саҡта, һоранып йөрөмәйәсәкмен. Ана,

*Бөйөк әҫәрҙәр бер йылда ғына ижад ителмәй. Йәшерен-батырыны юҡ: беҙ башҡорттоң төп китабы "Урал батыр" эпосынан уҙып, унан да бөйөгөрәк әҫәр ижад итә лә алмабыҙ. Шулай ҙа, һәр әҙип үҙенең заманын йырларға, кешелекте һәм үҙенең замандаштарын мөмкин тиклем алғараҡ алып барырлыҡ яҡты идеялар менән янырға тейеш. Беҙгә Урал батыр төп васыятын да әйтеп ҡалдырған: "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ. Яманға юл ҡуймағыҙ, яҡшынан баш тартмағыҙ". Әҙәбиәттең төп тәғлимәте - ошо. Беҙҙең шундай мәшһүр әҫәребеҙ бар. Шуға күрә, кемдер берәй әҫәр тураһында: "Бына, исмаһам, был шәп, бөйөк әҫәр!" ти икән, ул күпмелер дәрәжәлә хаҡлы булһа ла, асылда, хаҡлы булмаҫҡа ла мөмкин.*

***✓ Ысынлап та, тормош үҙенең һынауҙарын барыбер бирә. Ә ул һынауҙар кешене сыныҡтыра. Рәйес Түләк әйтмешләй: "Тетрәнеүҙәрҙән һуң донъя сағыуыраҡ, хистәр балҡышлыраҡ булып китә..."***

# КИТАП УҠЫҺА...

## әҙерәк булмаҫ инеме икән?



***Рәми ағай ҙа көндәлектәрендә: "Бына хәҙер мин әҙәбиәт институтының китапханаһын уҡып бөттөм", - тип яҙған. Икенсе курста: "Мин "Ленинка"ны уҡып бөттөм", - тигән. Бына ниндәй кимәл! Был - шағирҙың үҙенә һәм ошо әҙәбиәт институтына мөнәсәбәте. Ул - профессионал. Кешенең башы - компьютер һымаҡ. Башыңа мәғлүмәт һалаһың-һалаһың, артабан күңелеңдә лә ниндәйҙер тойғолар яралып, шиғыр булып килеп тә сыға. Кеше: "Хис менән аҡыл ике нәмә", - тип әйтә ул әйтеүгә. Әммә улар шул тиклем тығыҙ бәйләнгән - хистәр яңы фекерҙәр уята. Берәй яңы фекер ишетһәң, хисләнәһең. Рәми ағайҙың мөнәсәбәте бер өлгө ул. Һин, бер яҡтан, хаҡлыһың да... Ысынлап та, аҙ уҡыйҙар. Һис юғы, бер-береңдекен уҡырға кәрәк. Бөгөн яҙыусылар бер-береһенең яҙғандарын да уҡымай.***

сирелләргә, мохтаждарға ярҙам итһендәр. Ә мин әлегә үҙем булдыра алам", - тинем.

**Л. Абдуллина:** Һинең ҡарашың да бик үк дөрөҫ түгел кеүек, Ринат. Мәҫәлән, Афған, Чечен республикалары һуғыштарын үткән күп кенә егеттәр ҙә һинеңсә уйлап, торлаҡ шарттарын яҡшыртыу мөмкинлеге биргән льготалары була тороп, фатирһыҙ көн күрә. Ярай, үҙҙәре генә булһа. Ғаиләләре лә бар бит уларҙың. Балаларынды уйларға кәрәк. Айгиздең фекерен дауам итеп, яҙыусыға ҡараһаң, Рәсәйҙең ысынбарлығы күренә, тип өҫтәге килә.

**Р. Сөләймәнов:** Киләсәктә фатирым да булыр. Тормош яңы үрҙәргә ынтылыуҙар менән ҡыҙыҡлы. Тормошта бөтә нәмә бер тигеҙ бирелмәй. Әйтәйек, Айгиз етемлекте күргән кеше. Шулай итеп, бер яғы булһа, икенсе яғы булмай. Яҡшы әҫәр яҙыу өсөн шағир, прозаик кешегә тетрәнеүҙәр кисереү ҙә кәрәктер, бәлки? Элекке яҙыусылар аслыҡ, яланғаслыҡ заманын үтеп, бәлки, кешелеклерәк булғандыр. Әҙәбиәт тап шул кешелеклелек сифаттары тәрбиәләүҙе төп маҡсат итеп ҡуя бит. Хәҙер беҙҙе тетрәтерлек нимә ҡалды? Бер яҡтан, минең фекер дөрөҫ тә түгелдер: күңелдә өйкәгән, тетрәткән күренештәр аҙым һайын инде ул. Икенсе яҡтан, бәлки, киң мәғлүмәт сараларында даими һүрәтләнгән күңелһеҙ мәғлүмәттәрҙе күреп, уҡып, өйрәнеп тә бөткәнбеҙҙер? Беҙҙе бер нәмә лә аптыратмай кеүек...

**Л. Абдуллина:** Эйе, ысынлап та, хәҙер яҡты мәғлүмәт юҡ кимәлендә... Тәүге шиғырҙарымды тикшергәндә Ғилман ағай Ишкинин: "Шиғырҙарың бәхетле. Ә шағирҙың шиғырҙарында һыҙланыу булырға тейеш. Ысын шағирә булыр өсөн әле һиңә бик күп "ябалаҡ һурпаһы" эсергә кәрәк, һылыу", - тигәйне. "Ябалаҡ һурпаһы" тигәне - ябалаҡты ла һурпаға һалырлыҡ булғас, ниндәй ситуация тураһында һүҙ барғаны аңлашылалыр. Йылдар үткәс:"Һин миңә "ябалаҡ һурпаһы"н ныҡ теләнең шикелле", - тип көлдөм. Ысынлап та, тормош үҙенең һынауҙарын барыбер бирә. Ә ул һынауҙар кешене сыныҡтыра. Рәйес Түләк әйтмешләй: "Тетрәнеүҙәрҙән һуң донъя сағыуыраҡ, хистәр балҡышлыраҡ булып китә..."

**▸ Уҙған быуат урталары-икенсе яртыһында башҡорт әҙәбиәтендә йәштәрҙе берләштереп торған Рәми Ғарипов, Рәшит Солтангәрәев мәктәбе, башҡа мәктәптәр булған. Ә бөгөн кемдең мәктәбен иң тамырлыһы, иң нығы, иң шәбе, тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Л.Абдуллина:** Улар рәсми булмаған мәктәптәр, рухиәт, йөрәк мәктәптәре. Уларҙың мәртәбәһе лә ҙур. Ысынлап та, 60-сы йылдар башҡорт шиғриәтенең көсөн бер ни менән дә сағыштырырлыҡ түгел. Әҙәбиәткә ул тиклем ҡеүәтле тулҡын бөгөн килһә, бик шәп булыр ине. Ысынлап, ундай күренеш әҙәбиәттә бар. Рәшит ағайҙың янында ла прозаиктар бергә йыйылып, уның фекеренә ҡолаҡ һалырға ынтылды. Журналистикала минең өсөн һәр ваҡыт Венер Йәнбәков, Зөһрә Ҡотлогилдина мәктәбе булды. Улар һәр бер балаға яуап хаты яҙа торғайны. Улар күпме баланың күңелен һуғарған бит. Һәр бер шиғырҙы, һәр мәҡәләне тикшереп, улар күпме балаға ҡанат ҡуйған. Мәктәптәр шиғриәттә бар, тип иҫәпләйем. Мәҫәлән, Азамат Юлдашбаевты миҫал итеп килтерергә була. Уның янында шул уҡ "Ҡош юлы" тигән гитарала уйнап-йырлаусылар республика фестивале ойошто. Уның эсендә шиғриәт конкурсы ла бар. Уның артынан музыканттар ғына, шиғриәт һөйөүселәр генә түгел, ә төрлө йүнәлештәге ижади йәштәр тулҡыны килә. Азамат Юлдашбаев йәштәрҙе үҙенең фекере менән байытып, уларҙың дуҫы булып, бик һөҙөмтәле эш алып бара.

**А. Баймөхәмәтов:** Әҙәбиәткә килгән бер йәш кенә апай оло яҙыусыларҙың береһенә: "Ниңә беҙҙең әҙәбиәтебеҙ шундай түбән ул?" - тип һораған. Уға: "Һеңлекәш, һиңә ул "түбән" әҙәбиәткә етер өсөн эшләргә лә эшләргә кәрәк әле", - тип яуап биргәндәр. Шуға, әйтмәксе булам, беҙҙең әҙәбиәтебеҙ бик бай. Мәктәптәр күп булған. Ә бөгөнгөләренә килгәндә, теге йәки был мәктәп тураһында һүҙ алып барыр өсөн тәүҙә күпмелер ваҡыт үтергә тейештер. Рауил Бикбаевты, Ноғман Мусинды үҙемә өлгө итеп ҡуям. Ноғман Мусин һәр ваҡыт йәштәрҙе күҙәтеп, үҙ кәңәштәрен биреп бара. Кәрәк икән - ул шелтәһен дә әйтә, маҡтап та ала. Ғөмүмән, беҙ хәҙерге заман әҙиптәре мәктәбе менән генә ижад итергә тейеш түгелбеҙ. Элекке әҙиптәр мәктәптәре лә беҙгә таяныс булып тора.

**Р. Сөләймәнов:** Ижадта, хеҙмәттә яҙмыш һине кем менән осраштыра, кем менән бәйләй, ул кешеләр һинең уҡытыусыларың да. Мәҫәлән, миңә Сабир Шәрипов, Ринат Камал бик ныҡ ярҙам итте. Һәр кешенең ниндәйҙер бер ҡурсыусыһы була. Икенсенән, әҫәргә тотонған саҡта: "Әһә, был ағай, был апай минең әҫәремде уҡыһа, ни тип әйтер ине икән?" - тип тә уйлайһың.

**Л. Абдуллина:** Рауил Бикбаев ағай менән Тамара Ғәниева апайҙың да шундай ихласлығы бар. Улар беҙҙең ижадты күҙәтеп бара, берәй шиғырың баҫылһа, улар мотлаҡ фекерен әйтә. Был матур сифат кешенең шәхесенән киләлер. Тимәк, улар битараф түгел. Үҙҙәре һайлаған юлда кемдәр арттан килә - шуларҙы ҡурсалай. Быуындар күсәгилешлеге шулай булырға тейеш тә. "Тейеш" кенә түгел, үҙендән йәшерәк быуынды ҡарау - бурыс та. Мәҫәлән, миңә йәштәр менән аралашып, уларҙың шиғырҙарын гәзиттә баҫтырыу ҡыҙыҡ.

**▸ Киләһе һорауым ижад ысулы тураһында. Әҙәбиәт буйынса белемемде етерлек кимәлдә түгел, тип иҫәпләүем арҡаһында, уны тулыландырырға булдым һәм, башҡорт, рус, донъя әҙәбиәте классиктары әҫәрҙәрен тулыһынса уҡып бөтмәй тороп, шиғыр яҙырға тотонмаҫҡа ҡарар иттем. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ҡулына ҡәләм алған кеше белемгә таянырға тейешме, әллә яҡшы шиғыр яҙыр өсөн уға хистәре лә етәме?**

**Л. Абдуллина:** Рәми ағай ҙа көндәлектәрендә: "Бына хәҙер мин әҙәбиәт институтының китапханаһын уҡып бөттөм", - тип яҙған. Икенсе курста: "Мин "Ленинка"ны уҡып бөттөм", - тигән. Бына ниндәй кимәл! Был - шағирҙың үҙенә һәм ошо әҙәбиәт институтына мөнәсәбәте. Ул - профессионал. Кешенең башы - компьютер һымаҡ. Башыңа мәғлүмәт һалаһың-һалаһың, артабан күңелендә лә ниндәйҙер тойғолар яралып, шиғыр булып килеп тә сыға. Кеше: "Хис менән аҡыл ике нәмә", - тип әйтә ул әйтеүгә. Әммә улар шул тиклем тығыҙ бәйләнгән - хистәр яңы фекерҙәр уята. Берәй яңы фекер ишетһәң, хисләнәһең. Рәми ағайҙың мөнәсәбәте бер өлгө ул. Һин, бер яҡтан, хаҡлыһың да... Ысынлап та, аҙ уҡыйҙар. Һис юғы, бер-берендекен уҡырға кәрәк. Бөгөн яҙыусылар бер-береһенең яҙғандарын да уҡымай.

Шул уҡ ваҡытта Ғилман Ишкинин күп уҡыны һәм һуңғы йылдарҙа ысынлап та аҙ яҙҙы. Уның күңел торошо миңә шулай тойола торғайны - бер ҡараһаң, сабый бала, шул уҡ ваҡытта, йәшәп арыған бер аҡһаҡал...

**Р. Сөләймәнов:** Лариса апай, ә күп уҡыһаң, бәлки, ысынлап та, әҙ яҙыла башлайҙыр?

**Л. Абдуллина:** Рәми ағайҙың улай түгел бит. Уның шиғырҙары, көндәлектәре, мәҡәләләре һуң... Кешенең үҙенән торалыр инде ул барыбер.

**▸ Ә бөтөн йүнле нәмә яҙылып бөткән, тигән фекергә нисек ҡарайһығыҙ?**

**А. Баймөхәмәтов:** Улай тиһәң, төп китап - "Ҡөрьән" күптән яҙылған бит инде. Унан да алдараҡ яҙылған мәшһүр "Урал батыр"ыбыҙ бар. Әммә кеше, шунан сығып, яҙыуын һаман дауам итә бит. Яҙыусы ғилемле, белемле булырға тейеш инде, сөнки беҙҙә бер-береһенең ижады менән таныш булмаған кешеләр күп. Ул ғына ла түгел, ҡайһы бер олпат-олпат ағайҙар гәзит алдырмайҙар. Тимәк, ундайҙар бөгөнгө әҙәби мөхиттән, тормоштан ниндәйҙер кимәлдә артта ҡала, тигән һүҙ. Тағы. Ниндәйҙер әҫәр яҙырға теләһәң, һин мотлаҡ шул темаға арналған әҙәбиәтте уҡырға тейешһең, тиҙәр. Миңә берәү: "Һин балалар темаһына әҫәр яҙырға булғас, Макаренконың "Педагогическая поэма"һын, Альберт Лихановтың "Никто" китабын һәм башҡа китаптарҙы тулыһынса уҡып сыҡ та, шунан ғына яҙырға тырыш", - тигәйне. Әлбиттә, беҙ был хеҙмәттәрҙе мәктәп йылдарынан беләбеҙ. Әммә аныҡ ижадҡа тотонор алдынан ундай әҫәр уҡырға кәрәкмәйҙер, тим. Сөнки ул һине әйтер һүҙендән тайпылдыра. Һиндә икеләнеүҙәр барлыҡҡа килеп, эшеңә ҡамасаулауы бар.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**"Әҙәбиәт йылында халыҡты китапҡа ылыҡтырыу - яҙыусының иң беренсе бурысы", тине Лариса Абдуллина. "Әҙәбиәт йылы яҙыусының матди хәлен яҡшыртырға булышлыҡ итһен", - тине Айгиз Баймөхәмәтов. Ринат Сөләймәнов: "Әҙиптәргә тетрәнеүҙәр кәрәк", - тип тә һиҫкәндерҙе. Һәр кем үҙенсә хаҡлы. Ә беҙҙе әҙәбиәтебеҙ, халҡыбыҙ, тип янып йәшәгән, илһамланып эшләгән йәштәребеҙ барлығы ҡыуандырҙы. Лариса апай һымаҡ тәжрибәле әҙиптәр барҙа йәштәр дөрөҫ юлдан тайпылмаҫ, тигән ышаныста әңгәмә аҙағына нөктә түгел, ә нөктәле өтөр ҡуйыйыҡ. Ошондай йөкмәткеле, ихлас әңгәмәләрҙең дауамы алда ла булыр әле.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Ярай әле, фашистың пистолетын алмаған. Бик тә ҡыҙығып ҡуйғайны, тик ниндәйҙер эске тауыш уны был эштән тыйҙы. Әгәр немецтәр һиҙеп ҡалһа, ауылдағы бар әсирҙәрҙең дә башы китәсәге көн кеүек асыҡ.***



- Немецтар, - тине эргәлә ятҡан взвод командиры лейтенант Орлов биноклдән ҡарап. - Взвод, танкыларға ҡаршы һуғышҡа әҙерләнергә!

Старшина һәр һалдатҡа икешәр "лимонка" өләшеп сыҡты. "Патрон һәм гранаталарҙы әллә нишләп шулай йәлләп кенә бирәләр. Әгәр һуғыш була ҡалһа..." - тип тыныс саҡта уҡ уйлай торғайны Рәшит. Ул һорауҙы хатта взвод командирына ла биргәне бар. "Беренсенән, һуғыш тиҙ арала башланмаясаҡ, икенсенән, беҙҙең дәшһәтле армиябыҙҙың "НЗ" складтары иң заманса ҡоралдар менән тулы, өсөнсөнән, үҙең паникаға бирелеп, шул хәбәрҙе башҡаларға тараҡан өсөн хәрби трибуналға ла эләгеүең ихтимал..." - тип яуап биргәйне командир. Командирҙың үҙе лә тап Рәшитсә уйлағаны аңлашыла ине лә... Ә танкылар, бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ һиҙмәгәндәй, әкренләп яҡынлаша бирҙе. "Ҡайҙа беҙҙең танкылар, самолеттар? Учение ваҡытында сығарып күрһәтәләр ине бит?" Бына-бына арттан беҙҙекеләр килеп сығыр, тигән өмөт һәр береһендә баҙлай ине.

Бер аҙ яҡыная биргәс, немец танкылары бөтәһе бер юлы тигәндәй ут асты. Барыһы ла траншея төбөнә боҫто. Яҡында ғына снаряд ярылды. Әле бер тапҡыр атып та өлгөрмәгән бер нисә яугир хәрәкәтһеҙ ҡалды. Рәшиттең башындағы каскаһына ла, ҡолаҡ тондороп, ниҙер зыңлап ҡағылды. Әллә снаряд ярсығы, әллә таш, һәр хәлдә, каска һалдаттың башын һаҡлап ҡалды.

Танкылары артына йәшеренеп килгән немец һалдаттарына ҡарап, башҡа иптәштәре кеүек, Рәшит тә биш патронын бер-бер артлы атып бөтөрҙө. Иң алдан килгән танкының броняһына төшөрөлгән тәреһенә тиклем танырлыҡ була башланы. "Лә хәүлә уә лә ҡууәтә иллә билләһ...", - эстән генә уҡынып алды Рәшит. Ике гранатаһын да танкыға ҡарай ырғытты һәм окоп эсенә боҫто. Көслө шартлау яңғыраны. Танкының гусеницаһы өҙөлдө булһа кәрәк, килгән еренән кинәт уңға боролоп, туҡтап ҡалды, ләкин янманы. Ул ғына ла түгел, бер патронһыҙ һәм гранатаһыҙ ҡалған ҡыҙылармеецтар яғына ҡарай фашист машинаһы оҙон һәм йыуан көбәген бора башланы...

* * *

Ҡабырғаһына нык итеп тибеүҙән аңына килде Рәшит. Күҙен асҡас, үҙенә автомат төбәп торған өс нимес һалдатын күрҙе. Уларҙың береһе бар көсө менән арҡаһына типте һәм ҡулы менән ишаралап, аяғөҫтө баҫырға бойорҙо.

- Штейн зи ауф! - тип екеренде ул. Рәшит көскә тороп баҫты. Уны, төрткөләп, ситтә торған совет һалдаттары төркөмөнә алып барып ҡуштылар. Был әсирлек ине. Хәрби устав буйынса, пленға төшөү ҡәтғи тыйылғанын яҡшы белә Рәшит. Ниңә ул үҙе өсөн биш патронының береһен һаҡлап алып ҡалманы, тигән уй ғына әйләнде башында. Төркөмгә тағы бер взвод самаһы һалдат алып килделәр. Уларҙың береһе лә яралы түгел икәнен шәйләп алды Рәшит. Тимәк, яралыларҙы алып та тормайҙар.

* * *

Көплө машиналарға тейәп, ҡуларҙы көнбайышҡа табан алып киттеләр. Бер нисә көн барғандан һуң, аслыҡтан хәлһеҙләнгән әсирҙәрҙе Верден тигән ауылға алып килеп төшөрҙөләр. Ауыл тигәс тә, ауылға оҡшамағайны ул: өйҙәре лә таштан, урамдарына ла тигеҙ итеп таш түшәлгән.

Ҡулдарын артҡа ҡуйып, фуражкаһына ҡарсыға төшөрөлгән, йәшкелт һоро формалағы, күҙлекле асҡаҡ йөҙлө бер нимес әсирҙәргә ҡарап һүҙ башланы:




**Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көнөндә хәбәрһеҙ юғалған меңәрләгән ҡорбандарҙың береһе - ҡыҙыларменец Һөйөндөков Заһитулла ағайымдың яҡты иҫтәлегенә бағышлайым.**

- Бөйөк Германияға эшсе көстәр кәрәк, - тине ул. - Һеҙ немец армияһы өсөн аҙыҡ-түлек етештереүҙә ярҙам итәсәкһегеҙ. Хәҙер һеҙҙе фермерҙар бүлешеп аласаҡ. Тик тырыш булмаһағыҙ, йәиһә ҡасырға ниәтләһәгеҙ, атасаҡбыҙ, - ул һуҡ бармағы менән тоҫҡап күрһәтте һәм йәмһеҙ итеп йылмайып, боҙ киҫәген хәтерләткән күҙҙәре менән әсирҙәрҙең һәр береһенә тишерҙәй итеп ҡарап сыҡты. Унын ҡарашы ҡырлас танауы, сөм ҡара сәстәре, ҡалын ҡара ҡаштары менән рус һалдаттарынан айырылып торған Рәшиткә төбәлде:

- Кауфкас? - тип һораны немец "Кавказ" һүҙен боҙоп.

- Урал, - тип яуап ҡайтарҙы Рәшит, нәфрәт менән ҡарап.

- О, Оураль, гуд, гуд! - тине немец. Фашистың нимә күҙ уңында тотҡанын Рәшит аңламаны. Шулай ҙа "Беҙҙең Уралға барып етергә йыйынамы икән былар", тигән уй үтте башынан.

Нисектер бынан ҡасып, беҙҙекеләр яғына сығырға кәрәк. Үҙебеҙҙекеләр әле булһа ла яҡында ғына һымаҡ тойола ине, сөнки Рәшит хәҙерге көндә Германияның иң көнбайыш райондарының береһендә икәнен белмәй ине...

Шул көндө үк әсирҙәрҙе ауылдың бай кешеләренә тараттылар. Рәшит Барбара исемле өлкән ҡатынға эләкте. Барбара-байбисә, тип эстән генә уйланы әсир. Йөҙө асҡаҡ, туп-тура һынлы ҡатын тәүҙә бик уҫал һымаҡ күренде. Русса таҙа ғына һөйләшкән тәржемәсе ярҙамында ул Рәшит менән танышып алды. "Рәшит" һүҙен әйтергә башта теле әйләнмәне. "Рашет", тине ул баҫымды "ра" ижегенә ҡуйып, бер ни тиклем аҙапланғас. Әбей немец телендә йәнә әллә ниҙәр һөйләне, ә тәржемәсе унын әйткәндәрен руссалап аңлатып бирҙе:

- Яҡшы эшләһәң, асыҡмаҫһың, - тине ул әсиргә. - Герман армияһы тиҙҙән Мәскәүҙе аласаҡ, рустар бынан алыҫ. Ҡасып маташһаң, һине икенсе кеше алыштырыр. Әсирҙәр араһында йәшәргә теләүселәр күп.

Йәшәргә теләүселәр... Был яҡты донъяға килеп тә, кемдең генә йәшәргә теләге булмаһын инде. Әҙәм балаһына Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән иң ҡәҙерле нәмә - ғүмер. Рәшит тә, башҡа кешеләр кеүек үк, йәшәргә бик теләй ине. Тик әсирлектәге ғүмер... Юҡ, ни генә булһа ла - ҡасырға!

Йыуындырып, бығаса күрмәгән ят кейем кейҙереп, әҙ-мәҙ ашаттылар ҙа, Рәшитте әбейҙең ауылдан ике-өс саҡрымда ятҡан фермаһына алып барып, егермеләгән баш һыйыр малын көтөргә ҡуштылар. Унда беҙҙәге кеүек йәйрәтеп йөрөп көтөрлөк икһеҙ-сикһеҙ далалар юҡ. Бер хужалыҡтың ере лә бер нисә өлөшкә бүленгән, малдарҙы бер аҙна көтөүлектең бер өлөшөндә йөрөтһәң, киләһе аҙнаһында - икенсе ерендә. Ауыл егетенә эш ауыр булманы. Өҫтәүенә, көтөүҙе Митя исемле белорус егете менән сиратлап көтәләр. Байбисә уларҙың икеһенә лә ҙур ғына ҡул сәғәте биреп ҡуйҙы. Тап ул әйткән сәғәттәрҙә малдарҙы һарайҙан сығарып, бер үк ваҡытта ҡыуып индерергә кәрәк. Бер минутҡа ла яңылышырға ярамай! Көтөүселәргә өй хеҙмәтсеһе Ванда исемле ҡыҙ ваҡытында ашарға килтерә. Шундай тормошҡа өйрәнеп алыу өсөн дә бер талай ваҡыт кәрәк булды.

Рәшиттең эш һөйөүсәнлеге байбисәгә оҡшай төштө. Әбей унын менән яғымлы ғына һөйләшергә тырышты. Шул уҡ ваҡытта "Германияны аҙыҡ менән тәьмин итеп" йөрөүенә Рәшит эстән ғәрләнде. Ҡасырға, тигән уйын тормошҡа ашырырға яйлап ҡына әҙерләнә башланы. Юлға, тип, йәшереп сухари киптереп йыйҙы.

Йыш ҡына илдә ҡалған Талха ағаһы менән Мәрхиә еңгәһен, кескәй Камилды һағынып иҫкә алды. Ни уйлар ине улар әгәр пленда йөрөгәнен белһәләр? Беренсе Герман һуғышында ҡатнашҡан Мөхәммәтйән ҡоҙаһын иҫләне. Ул да биш йыл буйы немецтәрҙә пленда йөрөгән, тик ул ваҡытта әсирлеккә төшкән һалдат хыянатсыға түгел, киреһенсә, һуғыш ҡорбанына һаналған һәм, башҡа яугирҙар кеүек үк, халҡының һәм хөкүмәтенең хөрмәтенә лайыҡ булған.

Бер көн хәрби әсирҙәрҙе клуб һымаҡ өйгә йыйып, рус телендә кинофильм күрһәттеләр. Тәүҙә Германия армияһы нисек тигеҙ рәт менән бөтә Европа буйлап барған кадрҙар, унан һуң Германия пленына эләккән совет кешеләренә немецтар нисек яҡшы шарттар булдырыуын һәм әсирҙәр ниндәй яҡшы тыныс тормошта йәшәгәнен һәм эшләгәнен һүрәтләгән фильмды өйрөлттөләр. Хатта бер-ике "эш алдынғыһы"нан интервью ла яҙҙырып алғандар... Фильмдың аҙағында итек-ҡайыштары ялтлап торған НКВД хеҙмәткәрҙәре, немец пленынан ҡасып сыҡҡан әсирҙәрҙе теҙеп ҡуйып, һәр береһенең елкәһенә атып үлтереп сыға. Әсирҙәр араһында ауыҙҙарында әсә һөтө лә кибеп етмәгән илаулап торған йәш кенә һалдаттар. Ниндәй генә өмөт менән үҙебеҙҙең яҡҡа ҡасып сыҡҡан булған икән, меҫкенкәйҙәр...

- Провокация, - тине Рәшиттең артында ултырған бер әсир ярым тауышланып. Тәүге тапҡыр ишеткән булһа ла, Рәшиткә ул һүҙҙең мәғәнәһе аңлашыла ине. Шул көндән теге егет башҡаса күренмәне. Тимәк, тейешле урынға унын һүҙен шундуҡ алып барып еткергәндәр.

Ғүмер, кешеләргә иң ҡәҙерле булған ғүмер... Хыянатсылыҡта ғәйепләнеп, үҙебеҙҙекеләр ҡулынан үлһәң - бигерәк тә үкенесле. Ошо фильмды ҡарағандан һуң, Рәшиттең ҡасырға тигән теләге әкренләп һүрелә башланы.

Германияның төрлө төпкөлдәрендә һанһыҙ концентрацион лагерҙар барлығын да ишетеп йөрөнө Рәшит. Бөтә Европанан йыйылған миллионлаған әсирҙәр унда ғазап сиккәне, көн һайын меңәрләп үлтерелгәнлеге тураһында ла белә. Йәһәннәм утын хәтерләткән крематорий мейестәре хаҡында ла ишеткәне бар. Улар ҡайҙалыр алыҫ түгел, ә ошо Германия ерендә...

Бындағы әсир тормошо ла бик еңелдән булманы. Ауылдағы хәрби әсирҙәрҙең өҫтөнән ҡарарға йыуан, йәмһеҙ бер ниместе тәғәйенләп ҡуйҙылар. Ул эсергә ярата ине. Көн дә тиерлек кис иҫереп ала ла, бөтә әсирҙәрҙе сафҡа теҙә. Саф алдында үҙ телендә аҡырынып ниҙер һөйләй ҙә, кемде булһа ла тартып сығарып, үсе ҡанғансы типкеләй торған булып китте. Отто исемле шул ҡанһыҙ бәндәнең көн дә күрһәткән тамашаһын әсирҙәр шул ниместең яратҡан һүҙе менән "орднунг" тип атаны, "тәртип", йәнәһе. Сираттағы бер "орднунг" ваҡытында Отто бер әсирҙе үлтергәнсе туҡманы. Нык типкеләнеүҙән йәш кенә һалдаттың ауыҙ-морононан ҡан килеп, шунда уҡ йән бирҙе. Рәшиттең был нимескә булған асыуы тағы ла артты, тиһәң, аҙыраҡ булыр һымаҡ: барлыҡ түҙемлек ярҙарын емереп, тышҡа бәреп сығыр хәлгә етте. Шулай бер көндө кис, ғәжәпкә, сираттағы "орднунг" булманы. Ғәҙәт буйынса, Оттоноң торған йорто янына теҙелергә килгән әсирҙәр еңел һулап, яйлап ҡына таралыша башланы. Ҡайтып барышлай белорус Митя ярым шыбырҙап:

- Бөгөн Отто бик нык "тейәгән", ахыры, бая өйөнә һөйрәлә-һөйрәлә көскә инеп бара ине, - тине.

Шул ваҡытта Рәшиттең башына ҡылт итеп бер уй килде. Төн уртаһы үтеп, тирә-яҡ һил булғас, алдан әҙерләп ҡуйған бауҙы алып, һаҡ ҡына өйҙән сыҡты. Тирә-йүндә бер кем дә булмағанын яҡшылап асыҡлағас, Оттоноң өйөнә ҡарай йүнәлде. Үҙ илендә үҙҙәрен бик иркен тойған немецтар, "тыңлаулы" әсирҙәрҙе ҡурҡынысһыҙ тип һанай, күрәһең, бер өйгә лә һаҡсы ҡуймағандар. Тик Оттоноң өйө алдына килеп еткәс, ихатаһынан ҙур ғына эт абалап килеп сыҡты. Ләкин әсир ундай осраҡты алдан күреп белгәнгә күрә, бушлат кеҫәһенә һалып алып килгән икмәген эткә ырғытты. Икмәк һыныған ергә лә төшөрмәй тотоп алып ашай башлаған эт Рәшитте башҡаса борсоманы. Егет һаҡ ҡына өйҙөң ишеген асты. Ниместең яңғыҙ йәшәгәнен белә ул. Бәхеткә, ишек эстән бикле түгел ине. Фашистың йоҡоһонда хырылдауы әллә ҡайҙан ишетелә. Бүлмәнән күңел болғандырғыс асы һаҫыҡ еҫ килә. "Ысынлап та нык иҫергән", - тип уйланы Рәшит. Өҫ кейемен дә һалмаған килеш бер нәмә лә белмәй йоҡлап ятҡан фашистың ҡорһағы тын алған һайын бер күтәрелә, бер төшә. Тәҙрәнән төшкән ай яҡтыһында барыһы ла бик яҡшы күренә. Тик уянып ҡына ҡуймаһа ярар ине, уянһа - бөттө баш. Алдан уйлап ҡуйған буйынса, Рәшит иң тәүҙә түбәлә лампа элеп ҡуя торған ырғаҡ һымағыраҡ сөйҙө эҙләп тапты һәм бауҙың бер осон шул ырғаҡҡа бәйләне...

Иртәгеһен һалдаттар килеп, Оттоноң мәйетен машинаға тейәп, ҡайҙалыр алып киттеләр. Ул-был шау-шыу булманы. Күп эсеүҙән тилереп, аҫылынып үлгән, тигән хәбәр ауылға таралды. Шулай ҙа Рәшит күпмелер ваҡыт шикләнеп йөрөнө. Ярай әле, фашистың пистолетын алмаған. Бик тә ҡыҙығып ҡуйғайны, тик ниндәйҙер эске тауыш уны был эштән тыйҙы. Әгәр ниместәр һиҙеп ҡалһа, ауылдағы бар әсирҙәрҙең дә башы китәсәге көн кеүек асыҡ. Аллаһы Тәғәлә уны был юлы ла һаҡлап алып ҡалды: Рәшиттең йәшәргә шундай нык көслө теләген үтәгәндер. Был хәл егеттең ғүмерлек сере булып ҡалды. Ул ғына ла түгел, үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр кеше үлтереүе ине. Хәйер, ул фашистың кеше булыуы - икеле...

**(Дауамы бар).**

*✓ - Элегерәк яҙғыһын көн йылытып, март урталары етһә, баш итенә саҡырыша торғайнылар. Ҡайным туң иртәлә туҡырлап килеп инер ҙә: "Балалар, әсәйегеҙ баш ите һалды, ашҡа килегеҙ", - тип саҡырып китер ине.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺУЛАҒАН ҺАУАҢ...
## инсультҡа илтмәһен

■ Дөгө ярмаһына кокос майы өҫтәп бешергәс, уны 12 сәғәткә һыуытҡысҡа ҡуйып торорға кәрәк, шунан ғына ул ашарға яраҡлы була, тип белдерә Би-би-си. Һөҙөмтәлә, дөгөнөң калориялығы 60 процентҡа тиклем түбәнәйә. Ғалимдар фекеренсә, тап ошолай әҙерләнгән дөгөләге крахмалды организм үҙләштерә алмаясаҡ, тимәк, ул был ризыҡтан энергияны ла аҙыраҡ аласаҡ. Дөгө, углеводҡа бай башҡа аҙыҡтар кеүек, энергия сығанағы булып тора. Организмда ул ябай шәкәрҙәргә тарҡала. Артыҡ шәкәр организмда ҡала һәм кәрәк булғанда глюкозаға әүерелә. Әммә глюкозаның артыҡ булыуы яңы май ҡатламдарын барлыҡҡа килтерә. Шуға ла ғалимдар дөгөләге крахмалды "зарарһыҙландырырға" тырышҡан да инде. Әҙер дөгөнө туңдырып алыу был мәсьәләне еңел хәл итә, ти улар. Туңдырып иретелгән дөгөнө йылытһаң да, бер зарары ла юҡ.

■ Бысраҡ һауа инсульт сығанағы була ала, һынауҙар үткәргәндән һуң Эдинбург университеты ғалимдары ошондай фекергә килгән. Улар газ формаһындағы, шулай уҡ ваҡ һәм эре ҡаты өлөшсәләрҙе өйрәнгән. Һулаған һауала углерод окисы, көкөрт диоксиды йәки азот диоксиды саҡ ҡына күберәк булһа, инсульт хәүефе 1,5 тапҡырға арта. Гарвард университеты ғалимдары иһә һауаның бысраҡ булыуы менән хәүеф тойғоһо араһында бәйләнеш бар, тип раҫлай. Хәүеф тойғоһо - психика тайпылышының иң киң таралған төрө. Бөтөн донъяла был сир менән 16 процент кеше яфалана. Был тайпылыш эшкә һәләтлелекте түбәнәйтә, суицид хәүефен арттыра. Шуға ла бысраҡ һауа физик хәлгә генә түгел, психик торошҡа ла йоғонто яһай.

■ Биологтар раҫлауынса, ике йыл рәттән һәм унан да күберәк ваҡыт эшләмәгән ир-егеттәр үҙ тиҫтерҙәренә ҡарағанда иртәрәк ҡартая. Был турала "PloS One" журналы белдерә. Быны ДНК молекулаһындағы теломерҙың - хромосоманың осондағы участканың ҡыҫҡарыуы дәлилләй, бер нисә йыл эшләмәүсе ир-егеттәрҙә ул күпкә ҡыҫҡараҡ. Ҡыҫҡарған теломер ҡартлыҡтың етеүе тураһында белдерә һәм организмдың ҡартайыуының сәбәбе булып тора. Лондондың Империя колледжы ғалимы 1966 йылда тыуған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең 5,5 мең ДНК өлгөһөн тикшергән. Һөҙөмтәлә, күҙәнәк бүленеү өсөн кәрәкле теломерҙар ир-егеттәрҙән алынған өлгөләрҙә ҡыҫҡараҡ булып сыҡҡан. Был кешеләрҙең биографияһы менән танышҡандан һуң, уларҙың ғүмерҙәренең 2-3 йылын эшһеҙ үткәреүҙәре асыҡланған. "Һуңғы йылдарҙа ғалимдар оҙайлы эшһеҙлек һәм насар сәләмәтлек араһында бәйләнеште табырға тырыша ине. Беҙ быны күҙәнәк кимәлендә раҫланыҡ", - ти ғалим. Иң ҡыҙығы, был яңылыҡ ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағылмай. Ғалимдар хәҙер бының сәбәптәрен асыҡларға тырыша.

■ Кеше үҙенең яҡшы һәм кире сифаттарына ғәҙел булырға һәм уларҙы ҡабул итергә тейеш. Шул саҡта ғына ул икенсе яртыһы менән романтик мөнәсәбәттәр ҡора ала, тип белдерә Огайо штаты университеты психологтары. Тикшеренеүҙәрҙә 62 пар студент ҡатнашҡан. Улар өс өлөшкә бүленгән һорауҙарға яуап биргән. Психологтар тәүҙә кешенең үҙенә ҡуйған баһаһын һәм был саҡта ни тиклем ғәҙел булыуын тикшергән. Икенсе өлөштә студенттарҙың һөйгәндәренә булған мөнәсәбәте асыҡланған, уларҙың бер-береһенә асыҡ булыуы, серҙәрҙең булмауы баһаланған. Өсөнсө өлөштә иһә үҙ-ара мөнәсәбәттәр һәм үҙеңдең шәхес булараҡ үҫешең тураһында һүҙ барған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, үҙенең шәхесенә ғәҙел баһа биреүселәрҙең шәхси тормошо ла яйлы барған, үҙҙәре лә үҫеш кисергән.

ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!

**Был турала "Киске Өфө" гәзите яҙып сыҡҡайны инде. Ысынлап та, март айында, көн менән төн тигеҙләшкән мәлдә, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа ҡайһы бер йолалар атҡарған. Уларҙы бер аҙ онота төшкәнбеҙ, дөрөҫөрәге, һәр ваҡыттағыса, үҙебеҙҙекен һанға һуҡмай, башҡаларҙың йолаларын үтәүгә тотонғанбыҙ. Урыҫтарҙың "Масленица"һын, бына хәҙер ҡайһы бер төрки телле халыҡтарҙың "Науруз" байрамын үткәрергә ғәҙәтләнеп барабыҙ. Күптәр "Науруз"ды мосолмандарҙың Яңы йылы тип уйлай, әммә ысынбарлыҡта был байрамдың ислам диненә бер ҡағылышы ла юҡ.**

# БАШ ИТЕНӘ САҠЫРЫШЫУ

Халҡыбыҙҙа миҙгелгә, аш-һыуға ҡағылған йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр байтаҡ. Ни бары хәтер яңыртып, үткәнебеҙгә байҡау яһау ҙа етә. Мәҫәлән, борон баш итенә саҡырышыу тигән киң таралған йола булған. Был үҙенсәлекле йола яҙғыһын, март айында башҡарылған. Күгәрсен районының Ялсы ауылында йәшәүсе Вәсилә апай Ҡарағужина баш ите йолаһына бәйле хәтирәләре менән уртаҡлашты:

- Элегерәк, мин килен булып төшкән саҡтарҙа, яҙғыһын көн йылытып, март урталары етһә, баш итенә саҡырыша торғайнылар. Ҡайным туң иртәлә туҡырлап килеп инер ҙә: "Балалар, әсәйегеҙ баш ите һалды, ашҡа килегеҙ", - тип саҡырып китер ине. Алыҫтараҡ йәшәгәндәрен "Москвич" машинаһына тейәп алып ҡайта, беҙ, ауылдағылар, ете балаһының береһе лә ҡалмай, бәләкәй балаларыбыҙҙы ла алып, төп йортҡа йыйылыр инек. Ҡәйнәм табынға табаҡ тултырып баш ите ултыртыр ине, һурпаһында эре-эре итеп һалма бешерер ине. Ул ваҡытта баш итен бик ашап та барманыҡ, сүпләнеп кенә ашаған булып ултырыр инек. Әле килеп



кенә тәме танһыҡлай. Хәҙер уйлайбыҙ, халҡыбыҙҙың баш итенә йөрөшөү йолаһы шул балаларын, туғатыумасаһын йыйып алыуға бер сәбәп кенә булғандыр инде. Көҙөн-ҡышын һуғым ашына йөрөшһәләр, йәй бесән, өмә кеүек күмәк эштәр туплаған, ә яҙ күрешерлек әллә ни сәбәптәр ҙә булмаған бит инде...

Кеше хәҙер баш-тояҡтан төрлө ризыҡ әҙерләргә оҫтарҙы. Март башында, көндәр йылытып ебәргәс, мин дә баш-тояҡтарҙы өттөрөп, ҡырып йыуып, бешерергә ҡуйҙым. Ашһыу бүлмәһендә ҡойҡа еҫе тарала башлағайны, ейәнсәрем шуның еҫен мөрхәтһенмәй, маҙаһыҙланды бер талай. Магазиндан колбаса-фәлән алып ашағансы, шул үҙебеҙҙең таҙа ризыҡтарыбыҙҙы ашаһалар, арыуыраҡ булыр ине лә бит. Баш итен мин былай әҙерләйем. Ҡырып, йыуып таҙалағас, һалҡын һыу менән ҡат-ҡат сайҡатып, ите һөйәгенән айырылып, иҙелгәнсе бешерәм. Бешеп сыҡҡас, итен матурлап турайым, һурпаһын бер нисә ҡат һөҙәм дә, урталай ярып ҡына картуф һалам, һуңынан ус аяһындай эре итеп туралған һалмаларҙы бешереп алам. Табынға картуф менән һалма ҡатыштырып, өҫтөнә тоҙлоҡ ҡойоп бирәм. Һурпаһын эсмәйбеҙ, ҡойҡа тәме килә. Ә тояҡтарҙан һерелдәк (холодец) эшләйем. Тояҡтар бешеп сыҡҡас, итен айырып, ваҡлап турап, кире һурпаһына һалып, әҙерәк ҡайнатып алам. Борсаҡлы ҡара борос, тәменә ҡарап тоҙ, лавр япрағы, һуған йә һарымһаҡ һалып, тағы ла ярты сәғәт тирәһе ҡайнатам. Оҡшатҡандар бүрттереп дөгө йә тары ярмаһы ла һалалар. Һуңынан сөм тәрилкә, сеүәтә кеүек һауытһабаларға ҡойоп, һыуыҡҡа сығарам. Дүрт-биш сәғәттән һерелдәк әҙер ҙә була. Ҡапылғара кеше килгәндә өҫтәлгә картуф йә быҡтырылған кәбеҫтә менән бирһәң, үҙе бер дан ризыҡ инде.

Борон баш итен Ҡөрьән ашына тип айырып алып ҡалып, әруахтарға аят бағышлатҡандар, ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы ғына һыйлағандар...

**Айгөл АРЫҪЛАНБӘКОВА.**
**Күгәрсен районы.**

ЯҢЫ РУБРИКА: "ЭТИКЕТ"

# ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,
## йәғни йәмғиәттә үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре



**Кешенең үҙен тотошо - уның йәмғиәттәге үҙенсәлекле визит карточкаһы. Нәҡ ошо визит карточкаһынан сығып уның ниндәй тәрбиә алыуын, ҡайҙа үҫеүен генә түгел, ә тирә-яҡтағыларға булған мөнәсәбәтен дә белергә була. Үҙеңде дөрөҫ тота белеү - уңышҡа илтеүсе мөһим факторҙарҙың береһе. Шуға күрә был ҡағиҙәләр тураһында хәбәрҙар булыу барыһы өсөн дә мөһим. Этикет беҙҙең быуатта ғына барлыҡҡа килгән төшөнсә түгел, уның тамырҙары хатта беҙҙең эраға тиклемге осорға барып тоташа. Әлбиттә, ул саҡтарҙағы ҡағиҙәләр бөгөнгөләрҙән күпкә айырыла, шулай ҙа барыһының да нигеҙендә, алдан билдәләнгәнсә, кешенең үҙен йәмғиәттә тота белеү мәҙәниәте ята.**

Гәзит уҡыусыларыбыҙҙың теләгеп күҙ уңында тотоп, баҫмабыҙҙа ҡыҫҡаса ғына төрлө өлкәгә ҡағылышлы, әлеге ваҡытта актуаль булған этикет ҡағиҙәләре тураһында һөйләмәксебеҙ. Һүҙебеҙҙе көндәлек этикеттан башлайыҡ.

● Тирә-яҡтағыларға уңайһыҙлыҡ тыуҙырмау - көндәлек этикеттың төп ҡағиҙәһе. Был кешенең үҙ-үҙен тотошона ла, тышҡы ҡиәфәтенә лә ҡағыла. Әгәр ҙә кемделер яңылыш бимазалаһығыҙ икән, ғәфү үтенергә онотмағыҙ. Ғөмүмән, рәхмәт һәм ғәфү үтенеү һүҙҙәрен әйтергә һәр ваҡыт әҙер булығыҙ.

● Урамда йәки бина эсендә кемгәлер бармаҡ менән төртөп күрһәтеү, таныш булмаған кешеләргә туп-тура ҡарау, кемдеңдер, айырыуса ҡатын-ҡыҙ артынан әйләнеп ҡарауҙан һәм күҙ ҡарашы менән оҙатып ҡуйыуҙан тыйылыу мөһим. Шулай уҡ үтеп барыусыларға ниндәй ҙә булһа иҫкәрмә эшләү ҙә яҡшы түгел.

● Шулай уҡ урамда һағыҙ сәйнәү, тәмәке тартыу, ашау һәм эсеү ҙә кешене йәмләмәй. Бының өсөн махсус урындарға барыу иң яҡшыһы. Ҡулдағы сүп-сарҙы, тәмәке төпсөгөн ергә түгел, ә махсус сүп һауытына ташлау фарыз.

● Әгәр ҙә урамда китеп барғанда кейемеңдә нимәнелер төҙәтергә, ҡағырға, бәйләргә (салбар йәки юбка итәге бысранһа, ботинка бауы сиселһә, һ.б.) кеше күп йөрөгән ерҙән ситкәрәк китергә кәрәк.

● Урамда компания менән барғанда бөтә тротуарҙы биләргә ярамай. Иң уңайлыһы - ике-өс кешелек төркөмдәргә бүленеп атлау. Ир-ат ҡатын-ҡыҙҙың һул яғынан бара. Әгәр ҙә төркөмдә ике ҡатын-ҡыҙ икән, ир-егеттәр уртаға баҫа, сөнки был ҡыҙҙарға ниндәйҙер ярҙам күрһәтергә кәрәк булғанда иң яйлы вариант.

● Кеше күп йөрөгән тротуар уртаһында ике кешенең һөйләшеп тороуы, берҙән, йәмһеҙ булһа, икенсенән, ҡалған йәйәүлеләргә ҡамасаулай. Шуға күрә, әгәр ҙә әңгәмә оҙаҡ ваҡытты алһа, яҡындағы кафеға йәки ситтәрәк торған эскәмйәгә барып ултырыу уларҙың әҙәплелеге хаҡында һөйләйәсәк.

● Таныш булмаған урамда, ҡалала ниндәйҙер белешмә алыу өсөн полиция хеҙмәткәренә, урам һепереүсегә мөрәжәғәт итеү дөрөҫ булыр. Әгәр ҙә яҡын-тирәлә улар булмаһа, ғәфү үтенеп, үтеп барыусыларҙан һорарға ла була. Яуап алғандан һуң, мотлаҡ рәхмәт һүҙҙәре еткереү мөһим.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ЕҢЕҮСЕЛӘР ХӘТИРӘҺЕ

# ҺУҒЫШ ЯЛҠЫНЫНДА СЫНЫҠҠАН УҠЫТЫУСЫЛАР

**Шул уҡ йылдың майында Әҙеһәм Әлибаев көндәлегенә ошондай юлдарҙы теркәй: "Быйылғы йыл йөкмәнеп йөрөгән кешеләрҙән дә күп нәмәне күрмәҫһең. Бына берәүҙәр, бәләкәй арбаға һыйырын һәм башмағын егеп, кейергә кейеме, ашарға икмәге юҡлыҡтан икәне күренеп тора, ҡайҙалыр китеп бара. Өҫ-баштары ялбыраған, үҙҙәре әлһерәгәндәр. Мин уларҙы ҡыуып үтеүгә, таяҡ таянып, тоҡ йөкмәп барған икенсе кешегә осраным. Был минең менән юлыңғай Түбәгә ҡайтып килә. Ул үҙенән дә насарыраҡ йәшәүселәрҙе, аслыҡтан шешенеп, хәлһеҙләнеп ҡолап үлеүсе ҡыҙҙы һәм "Ҡара тәкә" совхозында үлгән малдарҙы бүлешеп ашауҙарын һөйләп килә".**

Дөйөм ауырлыҡтарҙан тыш, яугир уҡытыусының үҙенә генә төшкән ҡаршылыҡтар менән дә көрәшергә тура килә. Әҙеһәм Әлибаев һуғыштан һаулығын юғалтып ҡайтып төшә. Уға йыш ҡына Түбәгә дауаханаға йөрөргә тура килә. Тәүге директор уға буш торған атын бирмәй яфалай. Икенсеһе, уның урынына килгәне, ҡаты һәм тупаҫ булып сыға. "Бигерәк тә ошо яғы оҡшамай уның: кешенең тик насар яғын ғына соҡона, ә яҡшы яҡтарын баҫырып ҡалдыра, - тип яҙа Әҙеһәм Әлибаев яңы етәксе үткәргән тәүге йыйылыштан һуң. - Мәҫәлән, Ибраһимова уҡыусыларға саманан тыш ҡаты һәм хәрәкәтсән булыуҙа ғәйепләнде. Мәғәфүров - баһаларҙы юғары ҡуйыуҙа, ете сәғәтлек материал үтеүҙә, эшһеҙлектә ғәйепләнде. Класс етәкселәренең дә эштәре ҡәнәғәтләнерлек түгел, тип табылды. Әлибаев - "сит", йәғни рус һүҙҙәре ҡулланыуҙа, план буйынса үтеп бөтөлә торған нәмәне үтеп бөтөлмәүҙә, шуның менән ВКП(б) ҡарарына ҡаршы килеүҙә ғәйепләнеп, бер ысынға ике ялған ҡушылып, йөҙө йыртылды".

Әҙеһәм Әлибаевтың тормошонда ғаилә фажиғәләре лә була. Һуғыштан ҡайтҡас, ул Сөйөм исемле ҡыҙға өйләнә. Ике ҡыҙҙары тыуа. "Аҙағыраҡ Әҙеһәм менән Сөйөмдөң улы тыуҙы, - тип яҙып ҡалдырған Муллаҡай мәктәбендә шул йылдарҙа эшләгән уҡытыусы Сирғәлина Бибинур Әхмәт ҡыҙы. - Тик оҙаҡ торманы, үлеп ҡалды. Әҙеһәм бик тә ҡайғырҙы - шуны әле лә онота алмайым. Әҙеһәм арыҡ ҡына, аҡ йөҙлө егет булды. Урта буйлы ине. Сәсен һыртҡа ҡарай тараны. Буй-буй һыҙатлы костюм кейеп йөрөнө. Түшен тултырып, орден-миҙалдарын таҡты. Һикертә-һикертәрәк баҫып йөрөнө. Шул ваҡытта түшендәге наградалары "зыңҡ-зыңҡ" иткәне хәтерҙә".

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа уҡ шытып сығып килгән ҡайһы бер "яугирҙар" хаҡында ла яҙып ҡалдырған Әҙеһәм Әлибаев. "Үҙен анһаттан ғына өҫтөн күрһәтергә теләүселәрҙе тормошта күп осратырға мөмкин, - тип әсенеп яҙа ул 1947 йылдың 12 апрелендә, - ундай кешеләрҙе, ғәҙәттә, минең күңелем оҡшатып еткермәй. Фронтта бер соҡорҙан икенсеһенә боҫоп, нисек булһа ла кешенән артҡа ҡалырға тырышып - йәнен ҡыҙғанып, иҫәпкә бар,



*Муллаҡай ете йыллыҡ мәктәбенең бер төркөм уҡытыусыһы. Өсөнсө рәттә уңдан беренсе - өс Дан ордены кавалеры Әҙеһәм Әлибаев (40-сы йылдарҙың аҙағы).*

һанға юҡ, тигәндәй йөрөп ҡайтып, инде әллә кем булып ҡыланыусылар бар. Ундайҙар, тыныс тормошҡа ҡайтҡас, кәрәкһеҙ урында морондарын күтәреп маташалар, кеше алдында ҡойроҡ болғап, хәйлә менән көн итәләр. Күберәген ошондай әҙәм аҡтыҡтарынан һүҙ ишетергә һәм кәмһетелеүгә осрарға мөмкин. Бындай әҙәмдәр кеше менән кешеләрсә һөйләшергә лә теләмәй. Улар тормошта кеше һөйә торған нәмәләрҙе - аҡыллылыҡ һәм батырлыҡтарҙы ла - күрһәтә алмай һәм күрһәтә алмаясаҡтар ҙа, сөнки тормошта ҡойроҡ болғап йәшәү өсөн ҡулайлашҡандар".

"Биш йыл ғүмер күп түгел, ә бына шул ваҡыт эсендә Әҙеһәм Әлибаев үҙенең күп хыялдарын тормошҡа ашырып өлгөрә. Ситтән тороп Темәс педагогия училищеһын, аҙаҡ Магнитогорск педагогия институтын тамамлай. Яуҙан күкрәгенә Дан ордендары тағып ҡайтҡан батырҙың тормош юлы еңел булмай: һуғыштан һуңғы ауырлыҡ-етешһеҙлек кенә түгел, ҡайһы бер туң йөрәкле кешеләрҙең миһырбанһыҙлығы ла Әҙеһәмдең йөрәген әрнетә, шул бәндәләр менән көрәш уның күп көсөн ала". Һуңғы юлдар - атаҡлы яҙыусыбыҙ Шакир Янбаевтың һүҙҙәре. "Ағиҙел" журналында баҫылып сыҡҡан Әҙеһәм Әлибаевтың көндәлектәренә инеш сифатында бирелгән мәҡәләнән алынды был өҙөк.

...Бынан илле йыл элек, Сибай педагогия училищеһында белем алған саҡта, мин Әбйәлил районы егеттәре Камил Ниғмәтов, Марс Байымов, Әширәф Илһамов һәм башҡалар менән таныштым. Әширәф менән беҙ дүрт йыл бер бүлмәлә йәшәнек, бер сеүәтәнән аш ашаныҡ, бер өҫтәл артында ултырып белем алдыҡ. Шул саҡта уҡ әле мин Аҫҡар ауылында йәшәгән шөһрәтле бер уҡытыусы хаҡында ишетеп ҡалғайным. Ошо мәҡәлә өҫтөндә эшләгән ваҡытта, йәшлек дуҫыма шылтыратып, данлыҡлы уҡытыусы хаҡында һөйләүен һораным. "Мин Әдип ағайҙа уҡыманым, сөнки һигеҙ синыфты тамамлағас, Сибайға уҡырға киттем. Ә бына Әнисә, минең ҡатыным, унынсы һәм ун беренсе синыфтарҙа уның ҡулында уҡыған", - тип яуап бирҙе Әширәф. Ошо мәҡәләмдә бәйән иткәндәрҙе мин Илһамовтар ебәргән ҡулъяҙмаларға таянып яҙҙым.

Әдип Усман улы Ниязғолов 1912 йылдың 1 ғинуарында Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылында донъяға килгән. Ике һуғышта - фин һәм Бөйөк Ватан һуғыштарында - ҡатнашҡан. 1941 йылдың 26 июнендә ул немец илбаҫарҙарына ҡаршы һуғышҡа китә һәм Берлинғаса барып етеп, дошманды үҙ өңөндә туҡмай. Орден һәм ике миҙалға лайыҡ була. 1945 йылдың аҙағында тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта һәм Аҫҡар ауылында физика уҡыта башлай. Бер үк ваҡытта һуғышҡа тиклем Магнитогорск педагогия институтында башлаған, ләкин тамамлап өлгөрмәгән уҡыуын дауам иттерә.

Яугир уҡытыусы 1947 йылда оло фажиғәгә юлыға - ике аяғын да юғалта. Ҡәҙимге кеше был юғалтыуҙы кисерә алмаҫ, бөгөлөп төшөр ине. Ниндәй уйҙарҙы башынан үткәргәндер, ниндәй тойғолар кисергәндер шул мәлдә Әдип Усман улы, беҙ әйтә алмайбыҙ. Ни булһа ла, һуғыш ялҡынында сыныҡҡан утыҙ биш йәштәге башҡорт егете яҙмыш һынауынан еңеүсе булып сыға - биш йылдан һуң уҡыуын уңышлы тамамлай. Әдип Усман улы ике тиҫтә йылдан ашыу Аҫҡарҙың 1-се мәктәбендә математика уҡытыусыһы булып эшләй. "Эшкә бәләкәй арбаға ултырып китә торғайны. Ҡулында булды таяғы, шуның менән арбаһын этеп, мәктәпкә барҙы. Ҡар-буран мәлендә лә дәрескә һуңламаны, - тип иҫләй уҡытыусылары тураһында уның ҡулында уҡыған балалар. - Һис үҙен йәлләтмәне, кешенән ярҙам һораманы. Бер уҡыу бүлмәһенән икенсе бүлмәгә лә шул арбаһы менән күсеп йөрөнө. Таҡтаға эштәрҙе яҙыу өсөн арбаһынан табуреткаға күсеп ултыра торғайны. Яҙмаһы шундай матур булды - һоҡланып туймаҫлыҡ ине. Талапсан булһа ла, ваҡыты-ваҡыты менән шаяртып та ала торғайны. Ифрат мөләйем булды, хәлебеҙҙе һәр ваҡыт аңлаған уҡытыусы ине".

Әбйәлил ҡаһарманы барлыҡ тормошон Аҫҡар ауылы, уның тирә-яғында урынлашҡан ауылдарҙан килгән балаларға белем биреүгә арнай. Ихлас уҡыта ул - теләктәре булғандарҙы дәрестән һуң ҡалдырып та уҡыта. Уның ҡулында белем алған балалар техник белем биреүсе юғары уҡыу йорттарында, ауыл хужалығы һәм педагогия институттарында имтихандарын уңышлы тапшырып, уҡыуҙарын тамамлап, яҡшы белгестәр булып китә.

Тиҙҙән бөйөк Еңеүҙең етмеш йыллығын билдәләйәсәкбеҙ. Дәһшәтле осорҙоң ваҡиғаларын күҙ алдынан үткәреп ултырғанда, халҡыбыҙҙың ҡаһарманлығына һоҡланабыҙ, батырҙарыбыҙҙың исемдәрен иҫкә төшөрәбеҙ. Күңелдәребеҙ сикһеҙ ғорурланыу менән тула һәм шул уҡ ваҡытта күҙҙәребеҙҙән йәш тама. Яу ҡырҙарында ятып ҡалған ата-олатайҙарыбыҙҙың изге рухын иҫкә алыуҙан килә был күҙ йәштәре. Яуҙан әйләнеп ҡайтып та, ҡалған ғүмеркәйҙәрен халҡына бағышлаған уҡытыусыларыбыҙҙы ла иҫкә алабыҙ беҙ ошо көндәрҙә. Арабыҙҙа улар юҡ бөгөн, әммә уларҙың ҡылған изге ғәмәлдәрен беҙ онотасаҡ түгелбеҙ.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры.**

**(Аҙағы. Башы 12-13-сө һандарҙа).**

УҢЫШ ҠАҘАН

## НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

### Аңығыҙҙы уңышҡа көйләгеҙ

**4. Уңышығыҙҙы хуплап һәм туҡландырып тороусы изге мөхитегеҙҙе булдырығыҙ.** Уңыш ҡаҙаныу өсөн яһай алған иң уңышлы аҙымдарҙың береһе - остаздар һәм партнерҙарҙы белеп һайлау. Мин бындай дуҫтарҙы изге ҡулса тип атайым. Сөнки ошо ҡулсала булған аҙ ғына кешеләр тормошоғоҙҙоң барлыҡ өлкәләренә лә етди йоғонто яһай. Әгәр һеҙ ғаиләле икән, изге ҡулсала бер кеше бар ҙа инде; әгәр кем менәндер көн һайын ҡулға-ҡул тотоношоп эшләйһегеҙ икән - тағы бер урын буш түгел, тип иҫәпләгеҙ. Әгәр ошо ике кеше үҫешегеҙгә йоғонто яһамай икән, тимәк, ҡалған өсәүҙе һайлағанда иғтибарлыраҡ булырға кәрәк!

Һеҙҙең ошо изге ҡулсанан тыш, тағы ла остаздарығыҙ барлыҡҡа килеүе мөмкин. Минең остаздарым булып Билл Гейтс, Ричард Брэнсон, Ларри Эллисон, Уоррен Баффетт, Наполеон Хилл, Джю Пол Гетти, Эндрю Карнеги һәм башҡалар торҙо. Мин был кешеләр яҙған һәм улар тураһында нимә яҙылған - барыһын да ентекләп өйрәнәм. Үҙегеҙгә остаздар табығыҙ һәм уларҙан нимә алырға мөмкин, барыһын да алығыҙ, уларҙан өйрәнегеҙ.

**5. Уңышҡа килтереүсе социаль мөхит эҙләгеҙ.** Кешеләрҙең үҙ ғүмерҙәрен тауыш-тынһыҙ ғына күңел төшөнкөлөгөндә уҙғарыуы - үҙҙәрен ҡорбан итеп тойоуында. Йәнәһе лә, ҡорбандарға уңыш ҡаҙаныу өсөн тәмәке тартыуҙы, эсеүҙе, һүгенеүҙе ташларға, телевизор ҡарамаҫҡа, төнгө клубтарға йөрөмәҫкә һ.б., йәғни монахтар тормошо менән йәшәргә кәрәк. Ғәмәлдә иһә, аҡыллы баланс булыуы зарур. Йома кисен дискотекаға барып, бейеп ҡайтырға ла мөмкин. Әммә аҡыллыларҙың үҙҙәренә яраҡлы мөхитте юғарыраҡ аң ҡеүәһенә эйә булыусылар араһынан эҙләүен дә оноторға ярамай. Бизнес, уңыш һәм сәләмәтлек буйынса семинарҙар һәм тренингтар үткәргән ойошмалар менән ҡыҙыҡһынығыҙ һәм һеҙ унда бик күп ыңғай ҡарашлы кешеләрҙе осратырһығыҙ. Бындай сараларға йөрөүселәр үҙҙәрен үҫешкә көйләй - был һеҙҙең өсөн файҙалы мөхит.

**6. Камиллашыу программаһы буйынса йәшәгеҙ.** Көн һайын үҙегеҙҙе камиллаштырыуға ваҡыт бүлегеҙ. Ыңғай фекерле телепрограммалар ҡараһағыҙ ҙа, яҡшы китаптар уҡыһағыҙ ҙа, тик ыңғай фекерле кешеләр менән аралашһағыҙ ҙа кире фекер йоғонтоһона һәм кире программалау һөжүменә дусар буласаҡһығыҙ. Шуға күрә, көн һайын кире программалауға ҡаршы саралар күреү зарур. Иртән үҙегеҙҙе уңышҡа һәм бәхеткә ныҡлы итеп көйләмәй тороп, өйөгөҙҙән дә сыҡмағыҙ. Төпкө аң һеҙ "альфа" торошонда булғанда программаланырға мөмкин. "Альфа" торошо - көсөргәнештән арынған мәл, өн менән йоҡо араһы. Төнөн йоҡлағанда бер нисә "альфа" стадияһын үтәһегеҙ, төпкө аңға ыңғай мәғлүмәт биргән ниндәйҙер диск тыңларға ҡуйып, йоҡларға ятырға мөмкин.

**7. Үҙегеҙгә нимәнән баш тартыуығыҙ түгел, ә ҡайҙа йүнәлеүегеҙ тураһында отчет бирегеҙ.** Кире хәл-тороштан арыныу ғына етерлек түгел, нимәгәлер өлгәшергә теләһәгеҙ, яңы кәүҙәләнеш булдырырға өйрәнегеҙ. Шулай уҡ көҙгөгә йәбештерелгән маҡсатлы карточкалар, иҫтәлекле яҙыуҙар һәм башҡа ысулдар ҙа бик файҙалы. Улар һеҙҙең ниндәй йүнәлештә хәрәкәт иткәнегеҙҙе күрһәтеп торасаҡ. Ыңғай раҫлауҙар - мөһим нәмәләрҙе иҫегеҙгә төшөрөп тороуҙың яҡшы ысулы.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 6 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (12+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00, 03.55 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Однажды в Ростове". 1-я и 2-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
23.45 "Познер" (16+).
00.45 Ночные новости.
01.00 "Время покажет" (16+).
01.50 "Наедине со всеми" (16+).
02.45, 03.05 "Модный приговор".
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 03.20 "Диктатура женщин".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Цвет черемухи". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". Драматический сериал. 1-2-я серии (12+).
22.50 "Анальгетики. Пить или не пить?"
23.50 "Дежурный по стране" Михаил Жванецкий.
00.50 "Горячая десятка" (12+).
01.55 "Частное лицо". Детективный сериал.
04.15 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
23.00 "Кис ултырып". "Башҡорт йыры". Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Новости недели" (на русск. яз.) (6+).**
**12.00 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.15 "Уравнение судьбы" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (0).**
**16.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**16.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры (0+).**
**17.45 "Хазина" (0+).**
**18.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**18.30 "Два цвета страсти". Сериал (16+).**
**19.30 Новости спорта (на русск. яз.) (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (16+).**
**22.00 "Следопыт. Уральский хребет" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.00 "Человек ноября". Худ. фильм (16+).**

## 7 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Женский журнал".
12.30 "Однажды в Ростове". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет". Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Однажды в Ростове". 3-я и 4-я серии (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
23.55 Ночные новости.
00.10 "Структура момента" (16+).
01.15 "Наедине со всеми" (16+).
02.10 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Цвет черемухи". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". Сериал. 3-я и 4-я серии (12+).
22.50 "Шифры нашего тела. Неизвестные органы". Фильм 1-й (12+).
23.50 "Судьба. Закон сопротивления" (12+).
01.45 "Частное лицо". Сериал.
03.15 "Юрий Гагарин. Семь лет одиночества" (12+).
04.15 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 Алсу йырлай. Концерт (6+)
23.00 "Кис ултырып". "Вираж" бейеү ансамбле (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30 Новости (на русск. яз.) (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Сәмәр" (0+).**
**15.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Башҡорттар" (12+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости (на русск. яз.) (16+).**
**17.45 "Сыны Отчизны" (12+).**
**18.15 "Орнамент" (0+).**
**18.30 "Вепрь". Сериал (12+).**
**19.30 Новости. Тема дня (на русск. яз.) (12+).**
**20.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Темы дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**22.00 Уфимское "Времечко" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.00 "Красавчик". Худ. фильм (16+).**

## 8 АПРЕЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Однажды в Ростове". Сериал (16+).
14.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Однажды в Ростове". 5-я и 6-я серии (16+).
23.15 "Вечерний Ургант" (16+).
23.50 Ночные новости.
00.05 "Политика" (16+).
01.10 "Наедине со всеми" (16+).
02.05 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 03.05 "Шифры нашего тела. Неизвестные органы". Фильм 1-й (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Цвет черемухи" (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". 5-я и 6-я серии (16+).
22.50 "Специальный корреспондент" (16+).
00.30 "Последний бой Николая Кузнецова" (12+).
01.30 "Частное лицо". Сериал.
04.00 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад
23.00 "Кис ултырып". "Ант" төркөмө (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Борсаҡ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30 Новости (на русск. яз.) (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 Всероссийский фестиваль современной хореографии "Ветер перемен" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Шатлыҡ йыры" (0+).**
**15.15 "Шәп арба" (0+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**16.00 "Тәмле" (12+).**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.15 "История признания" (6+).**
**17.30 Новости (на русск. яз.) (6+).**
**17.45 "Сыны Отчизны" (12+).**
**18.30 "Вепрь". Сериал (12+).**
**19.30 "Телецентр" (0+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.00 "Виолет и Дейзи". Худ. фильм (16+).**

## 9 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Однажды в Ростове". Сериал (16+).
14.15, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Однажды в Ростове". 7-я и 8-я серии (16+).
23.20 "Вечерний Ургант".
23.55 Ночные новости.
00.10 "Эрнст Неизвестный. Я доверяю своему безумству" (16+).
03.00 Новости.
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30, 17.10 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
16.00 "Цвет черемухи". Мелодраматический сериал (12+).
17.00, 17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". 7-я и 8-я серии (12+).
22.50 "Вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "Демократия массового поражения" (16+).
01.40 "Не стреляйте в белых лебедей". 1-я серия. Драма.
03.05 "Последний бой Николая Кузнецова" (12+).
04.05 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
23.00 "Кис ултырып". Урал Иҙелбаев (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 17.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.45 "Книга сказок" (0+).**
**16.00 "Автограф" (6+).**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**17.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (12+).**
**18.30 "Вепрь" (12+).**
**19.30 Новости. Тема дня (на русск. яз.) (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**23.30 "Не привыкайте к чудесам" (12+).**

## 10 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Однажды в Ростове" (16+).
14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Музыкальный конкурс.
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.30 "Эрнст Неизвестный". "Я доверяю своему безумству" (16+).
01.30 "12 раундов". Криминальная драма (16+).
03.35 "В поисках Сахарного человека".
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "От всей души" (12+).
10.05 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (16+).
16.00 "Цвет черемухи". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести - ПФО".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Главная сцена". Музыкальный конкурс (16+).
24.00 "Подари мне немного тепла". Мелодрама (16+).
01.55 "Не стреляйте в белых лебедей". 2-я серия. Драма (12+).
03.20 "Демократия массового поражения" (16+).

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (0+)
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
23.00 "Арғымаҡ". Концерт. 2011й. (6+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Книга сказок" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30 Новости (на русск. яз.) (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30, 17.30, 21.30 Новости (на русском яз.) (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Зеркальце" (0+).**
**15.15 "Байтус" (6+).**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.00 "Үткән ғүмер" (6+).**
**16.30 Новости (на русск. яз.) (6+).**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!"**
**17.15 "Криминальный спектр" (12+).**
**17.45 "Позывной "Барс" (0+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**18.30 "Вепрь" (12+).**
**19.30 Новости. Тема дня (на русск. яз.) (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (6+).**
**23.00 "Крутой поворот" (16+).**

## 11 АПРЕЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
0610 "Укрощение огня".
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Целитель Лука" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Барахолка" (12+).
14.500 "Голос. Дети".
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
19.00 Коллекция "Первого канала".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым.
23.30 "Живите в радости".
01.00 "Моя любовь".
01.30 Пасха Христова. Прямая трансляция богослужения из Храма Христа Спасителя.
04.30 "Доброе утро" (12+).

### РОССИЯ 1
04.40 "Мужики!.." Худ. фильм (6+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.30 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.55 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Пасха. Чудо воскресения".
12.10 "Сила любви". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.40 "Сила любви". Продолжение сериала (12+).
16.45 "Танцы со звездами". Сезон-2015.
20.00 "Вести в субботу".
20.25 "Сказки мачехи". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
23.35 "Остров" (16+).
01.30 "Пасха Христова". Прямая трансляция Пасхального богослужения из Храма Христа Спасителя.
04.30 "Освободители". "Танкисты" (12+).

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
18.00 "Баламут". Фильм (6+)
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
23.00 "Кис ултырып". "90-сылар дискотекаһы" (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.10 "Барби и Хрустальный замок" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт. Уральский хребет" (12+).**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**12.45 "Наука 102" (6+).**
**13.15 "Орнамент" (0+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Баик-2015" (12+).**
**17.00 Финал Школьной баскетбольной лиги "КЭС-БАСКЕТ" ПФО (6+).**
**19.15 "Замандаш" (6+).**
**19.30 "Башҡорттар" (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Башҡорт йыры" (12+).**
**21.00 "Бизнес-сфера" (12+).**
**22.00 "Женское лицо войны" (12+).**
**23.00 "Тайны любви" (12+).**
**24.00 "Двойная жизнь Камиллы" (16+).**

## 12 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.40, 06.20 "Соловки. Место силы".
06.00 Новости.
06.40 "Укрощение огня".
08.10 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки с Дм. Крыловым" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Земля в иллюминаторе" (12+).
13.15 "Горько!" (16+).
14.10 "Теория заговора" (16+).
15.15 Коллекция "Первого канала".
17.45 Вечерние новости (с субтитрами).
18.00 "Точь-в-точь" (16+).
21.00 "Воскресное Время".
22.30 "Танцуй!"
00.50 "Маленькая мисс счастье". Комедия (16+).
02.45 "Модный приговор".
03.45 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1
05.25 "Остановился поезд". Худ. фильм.
07.20 "Вся Россия".
07.35 "Сам себе режиссер".
08.25 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.55 "Утренняя почта".
09.35 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Россия. Гений места" (12+).
12.25, 14.25 "Один в один".
14.00 "Вести".
16.00 "Бариста". Детективный сериал (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.35 "Молчун". Мелодрама (12+).
02.35 "Россия. Гений места".
03.30 "Пасха. Чудо воскресения".
04.00 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
23.00 "Беҙ дуҫлыҡ менән көслө". Концерт (6+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Барби: Дюймовочка" (0+).**
**09.45 Поздравление митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона с Пасхой (0+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Бауырһаҡ" (0+).**
**11.00 "Ал да гуль" (0+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Сулпылар" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.50 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**17.55 Футбол. РФПЛ. ФК "Уфа" - "Арсенал" (Тула) (12+).**
**20.00 "Историческая среда" (12+).**
**20.30 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**20.45 "Весна Маха" (6+).**
**21.00 "Любимое дело" (12+).**
**21.30 Новости недели (на русск. яз.) (12+).**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Баик-2015" (6+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.45 "Посвященный" (12+).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАЛАЛАР ЯҘЫУСЫЛАРЫ




**Вәсилә ӘБДРӘХИМОВА төҙөнө.**

**12-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Вәлидов. Бәхтегәрәй. Лайк. Игуселе. Ҡойроғо. Мөстәҡил. Ҡына. Моратына. Йәрмәкәй. Һаҡлыҡты. Рәсүлиә. Хәрәмгә. Ниәт. Либерал. Аҫтында. Тәм. Вече. Баласаҡ. Сәхрәләрҙе. Мортазин. Ҙуры. Түрә. Терәк. Файҙа. Алло. Рафиҡ. Нуры. Ҡаҡшатмаҫ. Быков. Ашан.

**Вертикаль буйынса:** Әмир. Хоҙайбирҙин. Сәнғәт. Риф. Йоа. Ылаусы. Иртә. Балиғ. Башҡорттар. Гонаһ. Арҡыры. Ватансылыҡ. Әҙәби. Ҡушаев. Лаҡлы. Иҫәпле. Ергән. Таба. Майы. Матур. Йөклө. Халиҡов. Етер. Бабич.Әрәмә. Елшанка. Мөрхәт. Әҙәми. Ләйлә. Лайм. Нано.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Апрель (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (17) дүшәмбе | 5:08 | 6:38 | 13:30 | 18:29 | 19:59 | 21:29 |
| 7 (18) шишәмбе | 5:06 | 6:36 | 13:30 | 18:31 | 20:01 | 21:31 |
| 8 (19) шаршамбы | 5:03 | 6:33 | 13:30 | 18:33 | 20:03 | 21:33 |
| 9 (20) кесе йома | 5:01 | 6:31 | 13:30 | 18:35 | 20:05 | 21:35 |
| 10 (21) йома | 4:59 | 6:29 | 13:30 | 18:37 | 20:07 | 21:37 |
| 11 (22) шәмбе | 4:56 | 6:26 | 13:30 | 18:38 | 20:08 | 21:38 |
| 12 (23) йәкшәмбе | 4:54 | 6:24 | 13:30 | 18:40 | 20:10 | 21:40 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 апрель** Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе гастроле **"Аҙашҡан ҡунаҡ"** (Н. Птушкина), драма

**11 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), муз. мелодрама

**12 апрель "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 апрель "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00

**7 апрель "Яҙмыш йылғаһы"** М. Кәрим прозаһы һәм шиғырҙары буйынса әҙәби-поэтик композиция. Башлана 15.00, 19.00

**8 апрель "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. Башлана 15.00, 19.00

**9 апрель "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 10.00, 12.00

ӘЙТЕШ

# МУЙЫН ТҮГЕЛ, БАШ БУЛЫР САҠ ЕТКӘН...

**Гәзиттең 13-сө һанында хәбәр еткергәйнек инде: шиғри әйтешкә тағы ла әүҙемерәк, йүнәлешлерәк, сағыуыраҡ итеү маҡсатында артабан "Киске Өфө"лә бер юлы ике сәсәндең әйтешен ойоштороурға ҡарар иттек. Әйтәйек, гәзиттең бер һанында бер сәсән һүҙ башлай һәм икенсе бер сәсәнгә һорау бирә. Артабанғы һанда теге сәсән һорауға яуап биреп, ҡаршы үҙенең һорауын бирә. Ике сәсәнгә йәнәш рәүештә тағы ике сәсән әйтеш ҡора ала. Майҙанға иң тәүҙә Айыҡтҡужа килеп етте һәм Өшөрәне әйтешкә саҡырҙы.**

**Айыҡтҡужа Өшөрәгә:**
Минеңсә, был әйтешегеҙ
Бары ҡыҙ-ҡырҡын өсөн.
Шуға күрә, ир-егеттәр
Әҙ ҡулланалар көсөн.
Теләк - еңемде һыҙғанып,
Бәйгегә сығыу ине.
Ҡыҙтәкә лә булғым килмәй -
Тәртә борорға инде.
Кем теләһә, шул саҡырһын,
Үҙем ҡапҡамды асмам.
Әйтешкә саҡырыусынан,
Ҡарыу ҡайтҡан, тип ҡасмам.
Әйтеште башлап ебәреп,
Ҡайҙа ҡасты Өшөрә?
Әллә ул да абыстаймы,
Ҡайҙа кемде өшкөрә.
Оялсан ғына булғастың,
Үҙең дә гүзәлһеңдер.
Минең кеүек егеттәрҙең,
Үҙәген өҙәһеңдер.
Миңә ҡарап ҡаш һикертмәй,
Нисек һин түҙәһеңдер?..

**Өшөрәнең Айыҡтҡужаға яуабы:**
Ҡатын-ҡыҙ ул - бишек йыры көйләмәгә,
Балаһына әкиәттәр һөйләмәгә,
Нишләйек һуң, ир-азамат ята боҫоп,
Тәүбә, ҡайсаҡ насыбай һурып,
шешә ҡосоп.
Ҡай береһе мал табырға Себер киткән,
Бәғзеләре уй уйлауҙан күптән үткән,
Ҡыҫҡа телен оҙон итеп бисә, бахыр,
Донъя йөгө тартҡан була
ҡалтыр-ҡалтыр.
Сәсәнлек ул бисә-сәсә эше түгел,
Йоҙ(о)роҡҡа йоҙроҡ бәрер кеше түгел,
Әммә тиһәң, ләкине лә ҡороп ҡалмай,
Бер ҡыҙҙы иһә яуапһыҙ ҙа тороп ҡалмай.
Ҡыҙҙар хәҙер егет тапмай йорт ҡормаға,
Көн-төн эштә, ваҡыты юҡ арт бормаға,
Ҡаш һикертер мода күптән үткән инде,
Муйын түгел, баш булыр саҡ
еткән инде.
Ысын әйтәм, баш булырға теләмәйбеҙ,
Һүҙҙе юҡҡа иләк тотоп иләмәйбеҙ,
Бәлки, берәй ир табылыр, ғәре килеп,
Ил уятыр һүҙен әйтер, кәре килеп.

**Шулай итеп, әйтеш кеҫә телефоны аша СМС менән дә: +7-937-835-34-74, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы аша ла: kiskeufa@ufacom.ru. ҡабул ителә.**

*Бер түрәгә дау килһә - түрәләр һөйөнөр, күп түрәгә дау килһә - түрәләр берегер.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



АФАРИН!

# ҒӘҘЕЛЛЕК БАЙРАМЫ...

## тигән баһа алды был конкурс

**Әлшәй районы Раевка ҡасабаһында "Башҡортостан ынйылары" Республика балалар фольклор бәйгеһе үтте. Ул 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына арналды. Быйылғы конкурстың темаһы - тыуған төйәгеңдәге һыу ресурстарына һаҡсыл мөнәсәбәт һәм уларҙы һаҡлауға бәйле халыҡ йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен тергеҙеү булды.**



*Баймаҡ балалары командаһы. Уртала, гармун ҡосаҡлаған егет үҙе була инде - Рәил Рәхмәтуллин!*

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, тарихы ни тиклем бай, тәрән, бөтмәҫ-төкәнмәҫ булыуын сағылдырыусы конкурс, тип баһаларға мөмкин был туғыҙынсы тапҡыр үткәрелгән "Башҡортостан ынйылары" Республика балалар фольклор бәйгеһен. Сәхнәгә сыҡҡан һәр коллектив йыл да үҙ төбәгенә генә хас булған үҙенсәлекле йолаларҙы, тәүсығанаҡтарҙы өйрәнеп, тулы мәғлүмәтле, мауыҡтырғыс, йыр-моңға, уйындарға бай сығыштар әҙерләй. Балалар өсөн был фестиваль тотош бер оло байрамға әүерелә, республиканың төрлө төбәктәренән йыйылыусы тиҫтерҙәре менән аралашыу, лидерҙар ярышында бер-береһен уйнатып, бейетеү, борондан килгән халыҡ уйындарын иҫкә төшөрөү ҙә ыңғай күренеш. Иң мөһиме, конкурсанттар үҙҙәре лә конкурстың әһәмиәтен тулыһынса аңлап тора. "Мин төрлө конкурстарҙа йыш ҡатнашам, әммә бөгөнгө ярыш беҙгә рухи байлыҡ өләшеүсе иң шәп сара", - ти Көйөргәҙе районы Илкәнәй урта дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусыһы Азамат Исҡужин.

Ярыш барышында бер коллектив сығыш яһап бөткәнсе, бүтәндәр уларҙы ҡарап, һеҙҙә нисек, беҙҙә былай, тип һығымталар яһап, кимәлдәрен самалап та ултырҙылар. Ҡырмыҫҡалы районы Малай ауылы мәктәбенең "Хазина" фольклор төркөмө етәксеһе Миләүшә Ғәйфуллина был конкурсҡа балаларҙы өсөнсө тапҡыр алып килгән һәм быға тиклем уҙғарылған ярыштарҙа башлыса ҡурай һәм ҡумыҙҙа уйнаһалар, быйыл тальян гармун оҫталары ла булыуын билдәләне. Белорет ҡалаһының Я. Хамматов исемендәге башҡорт гимназияһы төркөмө етәксеһе Сәриә Ҡаһарманова ҡотоҡ асыу йолаһын күрһәткән уҡыусыларына ҡарап, оло ҡәнәғәтлек кисереүе тураһында әйтте. Ошо йолаларҙы өйрәткән оло быуын кешеләре булғанда, балаларҙың уларҙы өйрәнеп ҡалырға ынтылыуы, йышыраҡ үҙ-ара русса аңлашыуға күсә барған ҡала балаларының сәхнәлә тик саф башҡорт телендә генә һөйләүе, башҡорт йыр, таҡмаҡ, бейеүҙәрен өйрәнеүе, башҡа һәләттәре асылыуы күптәрҙе ҡыуандырҙы.

Конкурсҡа нигеҙ һалыусы, жюри рәйесе, билдәле яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева менән әңгәмәләшкәндә ул: "Балалар был саранан арғымаҡҡа менгәндәй күтәренке рух, бөткөһөҙ тәьҫораттар менән юл буйына йырлашып ҡайтыуы тураһында яҙалар. Ә мин был сараға баһаны Бөрйән районы Әбделмәмбәт мәктәбе уҡыусыһы Ҡәҙриәнең бер һөйләме аша ғына бирәм: "Әсәй, һеҙҙең йәш сағығыҙҙағы кейемдәрҙә йөрөп, йырҙарығыҙҙы йырлап, таҡмаҡҡа бейеүҙәрегеҙҙе бейеп, ниндәй матур заманда йәшәгәнегеҙҙе аңланыҡ". Бына шулай, был проектта ғилми йүнәлеш тә, сәхнә оҫталығы ла, ойоштороу һәләте лә, сәнғәттең һәр төрө буйынса оҫталыҡ та, сәхнәлә үҙеңде тотоу маһирлығы ла - ҡыҫҡаһы, уҡыусы бала үҙен һәр тарафтан һынап ҡарай алды. Йыл һайын ун ете-ун һигеҙ коллектив ҡатнаша. Бер йылы хатта егерме дүрт булып киттеләр. Ярыш асыҡтан-асыҡ бара. Тамашасылар, йәғни конкурста ҡатнашыусылар үҙҙәре үк еңеүсене билдәләп ултыра. Шуның өсөн Ғәҙеллек байрамы тигән баһаға лайыҡ был ярыш", - тигәйне.

Әйткәндәй, быйылғы "Башҡортостан ынйылары"ның төп призы Баймаҡ ҡалаһының 4-се лицейы коллективына бирелде. Балалар "Төйәләҫ" халыҡ йырын башҡарып, ямғыр саҡырыу йолаһын үтәп, йылға менән бәйле тарихты һөйләп, таланттарын һәр яҡлап күрһәтә алды. Коллективтың лидеры Рәил Рәхмәтуллин халыҡҡа йылға буйҙарын сүп-сарҙан таҙартырға, тәрән тамырҙарыбыҙҙы онотмаҫҡа тигән фекерҙе еткерергә тырышыуҙары тураһында һөйләне. Сәхнәнә төшөп киткәс тә әле ул район мәҙәниәт йорто бинаһы коридорҙары буйлап тальян гармунынан моңдар ағылдырып уйнап йөрөнө. Ситтән генә күҙәтә торғанда, уның турала ололарҙың: "Был ысынлап та ауылдың беренсе егете, гармунсыһы!" - тигәндәре ишетелеп ҡалды...

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕРӘҮ - АЛЛА ҠОЛО...

## берәү - бәндә ҡоло

Тауҙай талабың менән бергә күбәләй эшең күренһен.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бөйөк кеше уларҙың бөйөклөгөн аңлап, бөйөк эштәр өсөн көрәшә, ә ахмаҡ уларҙың ниндәй дәрәжәлә ауыр икәнен аңламай көрәшкә тотона.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Асыҡ күңелле кешенең йөҙө лә асыҡ.

**(Фридрих Шиллер).**

Бәхәскә тотонор алдынан уның ахыры дошманлыҡ менән түгел, ә дуҫлыҡ менән тамамланыуына иҫәп тот.

**(Диодор Сицилийский).**

Ысын бәхет - үҙебеҙҙең Хоҙай һәм кешеләр алдындағы бурысты аңлау, киләсәк тураһында борсолмайынса, бөгөнгөгә ҡыуаныу.

**(Сенека).**

Бер түрәгә дау килһә - түрәләр һөйөнөр, күп түрәгә дау килһә - түрәләр берегер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хоҙай һөмһөҙ була алмай, юғиһә, ул бит кешене көлөү менән бүләкләмәҫ ине.

**(Сидней Харрис).**

Ғашиҡ кеше мотлаҡ ахмаҡлыҡтар ҡыла...

**(Гете).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ярлы оҫтаның шундай ҡыҙыҡ ҡына ғәҙәте булған: оҫтахананһында эшләп арығас, үҙенән алыҫ булмаған урында урынлашҡан бер хан һарайындай өйгә килеп, ихатаһына инеп, өйҙөң ишеген шаҡыған. Бай хужа күренеү менән, баш кейемен һалып, уға сәләм биргән дә, башҡа бер ни өндәшмәй, кире боролоп, ҡайтып киткән. Был хәл бик күп тапҡырҙар ҡабатланған.**

**- Һиңә минән низер кәрәкме?- тип һораған берҙән-бер көндө бик нык аптыраған бай хужа. - Бына байтаҡтан алып һин минең йортом ишеген шаҡыйһың, тик бер ни ҙә өндәшмәйһең. Ниндәйҙер мохтажлығың булһа, әйт, хәл итергә тырышырмын...**

**- Рәхмәт әфәндем, - тигән оҫта. - Миңә һеҙҙән бер ни ҙә кәрәкмәй. Мин һеҙгә байҙар нисек йәшәй икәнен күрергә, һеҙҙең байлыҡҡа тамаша ҡылып, күңел йыуатырға ғына киләм. Быны беҙ, ярлы кешеләр генә эшләй алабыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һеҙҙең кеүек бай кешеләр бындай күңел йыуатыусы тамашанан мәхрүм, сөнки һеҙҙең тирәлә бит тик ярлылар ғына йәшәй..."**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ҺАЙ, ШИЛМА...

**Күбәләк-тиләү һөйләшендә кешене һүрәтләү, уның төрлө сифаттарын билдәләгән һүҙҙәр байтаҡ. Гәзит уҡыусыларҙы уларҙың бер нисәһе менән таныштырғым килә.**

**Талҡыяҡаҡ** - бер туҡтамай һөйләүсегә әйтелә
**Быҙмыр** - яй, эшкә һүлпән
**Былҡыш** - эш рәтен белмәгән
**Бирән** - ныҡ һимеҙ, ашамһаҡ кеше
**Шилма** - шуҡ, шаян кеше
**Һалмыш** - иҫерек, "шайтан һыуы"н эсеп алған
**Көшкә** - иркә, ҡылансыҡ
**Ҡыпыш** - ҡупшы итеп кейенеп йөрөүсе
**Шапыш** - әрһеҙ кешегә әйтелә
**Быйтыс** - үсексән, һүҙ күтәрмәй
**Яшыҡ** - теңкәгә тейеүсе, бимазалап йөрөүсе
**Ширай** - яланғас, кейеме алама
**Баймабаш** - уйламай эшләгән
**Шыҡы һуғыу** - дуҫтарса көлөүсе
**Баҡна** - ҡараусыһыҙ, етем
**Сәркәш** - үҙ һүҙле, еңмеш
**Ҡытмыр** - һаран, ҡыш көнө ҡар һорап алып та булмай
**Аҙман** - үтә лә тәртипһеҙ
**Һипау** - аңра, аҡылһыҙ
**Йөнтабан** - үтә лә һаҡсыл, йәки шым ғына килеп ингән кеше
**Һерәү** - мин-минлеге көслө, бәйләнсек
**Мыҡый** - белем кимәле самалы
**Көфөй** - йылы яратҡан, йылы итеп кейенгән
**Өшкәбә** - тиҙ өшөп барыусан
**Атиха** - ир-егеткә тартым холоҡло ҡыҙ бала
**Ҡожоҡа** - тырнанырға яратыусы
**Һәптән** - ауылсылап йөрөүсе
**Ләгер** - ауырыу, йонсоған

**Нәкип ӘЙҮПОВ.**
**Учалы районы Озерный ауылы.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru** **kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 3 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 1511